ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

14-20 июль (майай)

2018

№28 (810)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Кем алыҡ? 2



Сит ерҙәргә барып… фәһем алып 4-5



Зәйнулла ишан мираҫы - бөтмәҫ хазина 6-7



Ауыл эшҡыуары шуны аңлай: ул аҫабалыҡ менән көслө 8-9



ТВ-программа 14

*Һәр яңы көн беҙгә яңы яҙғы миҙгел кеүек бирелә. Уйҙарыбыҙ, эштәребеҙ, хыялыбыҙ һәм бөгөнгө тырышлығыбыҙ иртәгәге уңышты тәьмин итәсәк. Бөгөн бирелгән мөмкинлекте файҙаланмау - ул яҡты һәм яҡшы киләсәкте алыҫлаштырыу тигән һүҙ. Бөгөнгө көндө уйың менән кисәгене ҡабатлау йә иртәгәне көтөү өсөн файҙаланма. Эште башлау өсөн бөгөндән дә яҡшыраҡ көн юҡ.*

*Джим РОН.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ниңә йәштәр эшсе һәм ауыл хужалығы һөнәрҙәрен үҙ итмәй?

***Булат БИКСАЕВ, Урал аръяғы агроинженерия колледжының уҡытыу-производство-эштәре буйынса директор урынбаҫары:*** Ҡала йәштәре хаҡында әйтә алмайым, ә бына йәштәрҙең ауыл хужалығы һөнәрҙәрен үҙ итмәүе хаҡындағы фекерегеҙ менән килешмәҫ инем. Ауыл хужалығы, шөкөр, йәшәп ята, уға белемле эшсе ҡулдар кәрәк, һәм беҙ уларҙы әҙерләйбеҙ. Нигеҙҙә, ауыл балалары, ғүмер буйы ерҙә эшләп күнеккән ата-әсәләре хеҙмәтен күреп үҫкән, улар һөнәрен дауам итерҙәй йәштәр килә уҡырға. Киң профилле тракторсы-машинистар әҙерләйбеҙ, ә уның 5-6 категорияһы бар, шуларҙың һәр береһе буйынса айырым хоҡуҡ документы бирелә. Хеҙмәт баҙарында электр монтерҙары, иретеп йәбештереүсе һөнәрҙәренә лә һорау бик юғары. Тағы шуныһы бик мөһим: беҙҙең Йылайыр районы Юлдыбай ауылына бөтөн Урал аръяғы райондарынан: Баймаҡтан, Әбйәлилдән, Хәйбулланан, хатта Бөрйәндән килеп, урта һөнәри белем ала үҫмерҙәр. Ҡыҙҙарға ла үҙҙәренә яҡын һөнәр һайлау мөмкинлеге бар беҙҙең колледжда: ашнаҡсы һәм һатыусылыҡ серҙәренә өйрәнә улар. Яҡшы уҡыған балалар БДИ тапшырмайынса, әңгәмә нигеҙендә, беҙҙең йүнәлтмә буйынса юғары уҡыу йортона инә ала хатта. Был тырышып уҡыу өсөн үҙе бер дәртләндереү сараһы ла. Ә ауылдарыбыҙға юғары белемле белгестәр ҙә бик кәрәк. Заман алға барған һайын, беҙҙең уҡыу йорто ла бер урында тормай, уҡыу-уҡытыу эштәрен камиллаштыра, яңы эш формалары эҙләй. Лицейҙан колледж статусына күсеү ҙә беҙҙең уҡыу йортонон абруйын күтәрҙе. Фермерҙарҙан практикаға студенттар ебәреүҙе һорап, хат-заявкалар килә тора.

***Әлфинә БАЯЗИТОВА, уҡытыусы, Өфө ҡалаһы:*** Баш ҡалабыҙ вуздарының береһендә сит телдәр факультетын тамамлап, мәктәптә эшләп йөрөйөм, ләкин уҡытыусы һөнәре бер ваҡытта ла хыялым булманы. Мин мәктәпте тамамлаған осорҙа һәм әле лә ул шулай: аттестат алғандан һуң һин мотлаҡ юғары уҡыу йортона инергә тейешһең, тигән маҡсат (урыҫса әйткәндә - установка) ҡуйыла ине бала алдына. Тик быны бала үҙе әллә ни теләмәһә лә, ата-әсәләр шулай хәл итте. Вузға инә алмайһың йәки унда уҡырға теләмәйһең икән, тимәк, һин башҡаларҙан кәм, наҙан, аңра һ.б. Ана шундай "йәмәғәт фекере" шауҡымында миңә лә, һөҙөмтәһен күҙ алдына ла килтерә алмаһам да, һайлау мөмкинлеге булмағас, мәктәптә яратып шөғөлләнгән сит телдәр буйынса вузға инеп китергә тура килде. Дөрөҫөрәге, миңә ул саҡ уйларға, һайларға ваҡыт та булманы. Хәҙер килеп, аңланым: был минең йүнәлеш түгел. Сит телдәрҙе үҙ аллы ла, махсус курстарға йөрөп тә өйрәнергә була, ә минең күңел бөтөнләй икенсе һөнәргә тартыла. Тик уның буйынса махсус белемең булмағас, эшкә алмайҙар. Ә университетта 6 йыл (бакалавриат + магистратура) ғүмерҙе тиккә уҙғарғанмын! Иң мөһиме - диплом түгел, ә күңеленә ятҡан эш: тегенсеме ул, төҙөүсеме, токарь йә фотографмы, кондитер йә парикмахермы... Заводҡа берәй цехҡа өйрәнсек булып урынлашып та аҙаҡ квалификациялы эшсе, станоксы булып киткән ихтирамлы кешеләр аҙ түгел бит баш ҡалабыҙҙа. Шуға ла мәктәп тамамлаған йәштәргә өндәшкем килә: үҙегеҙҙән башҡа бер кемде лә тыңламағыҙ - документтарығыҙҙы ниндәйҙер вузға алып барып тапшырырға ашыҡмағыҙ, ә уйланығыҙ: ниндәй һөнәр күңелегеҙгә яҡын? Уға яуап таба алмаған хәлдә бер йыл ҡайҙалыр эшләп алығыҙ. Әлеге аҡылым булһа, мин тап шулай эшләр инем. Шул ваҡыт эсендә тормошоғоҙҙағы төп һорауға, моғайын, яуап табырһығыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ҠАНДА БУЛҒАН ҠОМАР...

## аңыбыҙ уяныуын көткән икән дә

**Ошо көндәрҙә Иглин районында традицион яндан уҡ атыу буйынса III халыҡ-ара "Мәргән уҡсы" фестивале үтте. Унда Башҡортостандан һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән, Словакия, Германия, Беларусь, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан илдәренән һикһәндән артыҡ кеше ҡатнашты. Сәмле ярыштарҙа үҙ таҫыллыҡтарын күрһәтергә килгән уҡсылар, көс һынашыуҙан тыш, Иглин районы һабантуйы күренештәрен дә тамаша ҡылып, ерле халыҡтың мәҙәниәте менән яҡындан таныша алды.**

**(Дауамы 11-се, 16-сы биттәрҙә).**



Былары - үҙебеҙҙең уҡсылар.

12+

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Эргә-тирәләге таныштарығыҙҙы, туғандарығыҙҙы иҫкәртегеҙ, зинһар: 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәһәләр, әле лә һуң түгел - 20 июлгә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе августан алдыра башлаясаҡтар. Шулай уҡ июль-август айҙарында элекке хаҡ менән, йәғни 560 һум 82 тингә, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә гәзитебеҙгә яҙылып була. Сентябрҙән иһә хаҡтар бер аҙ ҡиммәтләнер, тип көтөлә.**



● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Май-июнь айҙарында 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ:

Мәләүез ҡалаһынан Лена Хәйруллина, Ишембай ҡалаһынан Р. Әхмәров - **"Башкиры"**;

Ғафури районы Ҡауарҙы ауылынан Рим Насиров, Баймаҡ районы Темәс ауылынан Мәғәфиә Ғәниева, Билал ауылынан Мансур Кәримов, Ҡырмыҫҡалы районы Мөкәй ауылынан Рәйфә Фәйрушина, Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан М.Иҙрисова, Баҡалы районы Иҫке Ҡатай ауылынан Нуризә Ситдиҡова - **Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"**;

Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Нәғимә Илһамова, Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Менәүәрә Сәлишева, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Людмила Зиннурова, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Булат Исҡужин, Йәнйегет ауылынан Әхәт Кирәев, Баҡалы районы Иҫке Маты ауылынан Г. Вәлиева, - Зөлфиә Ханнованың **"Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"**;

Баймаҡ районы Оло Басай ауылынан Р. Сафина, Күгәрсен районы Йомағужа ауылынан Разифа Киленбаева, Бөрйән районы Әтек ауылынан Зәйнулла Хәкимов - **Миләүшә Ҡаһарманованың "Күңелем йылы теләй"**;

Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылынан Сабит Насиров, Көйөргәҙе районы Айсыуаҡ ауылынан Урал Ҡәйүпов, Әбйәлил районы Целинный ауылынан Ш. Хәсәнов - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**;

Йылайыр районы Һултантимер ауылынан Мәҙинә Әфләтүнова, Баймаҡ районы 1-се Төркмән ауылынан Хәлиҙә Әхмәтшина, Әлшәй районы Ибрай ауылынан М. Еникеева - **Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө"**;

Учалы районы Уральск ҡасабаһынан Г. Зиннуров, Салауат районы Тирмән ауылынан Фәүзиә Шакирова, Баймаҡ районы Үрге Таһир ауылынан Айҙар Байраҡаев - **Флүр Ғәлимовтың "Яңы башҡорт"**;

Әбйәлил районы Аслай ауылынан Фәниә Мансурова, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Ғәйнуллина, Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан М. Даутова, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Маһикамал Иҫәндәүләтова, Янғаҙы ауылынан Хәмит Теүәлбаев, Иҫке Сибай ауылынан Миңлегөл Усманова, Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан И. Шәйәхмәтов, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Зифа Сәлмәнова, Учалы районы Иҫке Байрамғол ауылынан Марат Сәйфетдинов, Белорет районы Ботай ауылынан Разия Ирғәлина, Бөрйән районы Ырғыҙлы ауылынан Тәнзилә Аллаярова - **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ булды.

**Иҫкәрмә:** бүләкләнеүселәр китаптарҙы балалары, туғандары, таныштары аша алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма ул "Киске Өфө". Алдырығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ниңә йәштәр эшсе һәм ауыл хужалығы һөнәрҙәрен үҙ итмәй?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Лундеж БАЙМОРАТОВ, Сибай күп профилле һөнәри колледж директоры:*** Башҡортостан, айырыуса уның Урал аръяғы райондары һәр төрлө мәғдән һәм аҫылташтарға бай, шунлыҡтан башҡорт халҡы борондан мәғдәнселек кәсебе менән шөғөлләнгән. Әйткәндәй, был хаҡта "Киске Өфө" гәзитендә ҡыҙыҡлы материалдар баҫылып тора. Әле бына үткән һанда ғына тарихсы А.Ярмуллиндың "Башҡорттарҙа мәғдәнселек кәсебе" тигән мәҡәләһе сыҡты. Башҡорт балалары өсөн 1773 йылда Санкт-Петербургта Тау училищеһы астырыуға өлгәшкән Исмәғил Тасимов тигән арҙаҡлы шәхесебеҙ, уның эшен дауам итеүсе бик күп ғалим-геологтарыбыҙ, минерологтарыбыҙ билдәле. Урал аръяғы райондарынан ғына ла Басир Мәһәҙиев (Ейәнсура), Миңләхмәт Моталов (Хәйбулла) күеҡ ғалимдарыбыҙ бар. Ошондай ерлектә тәрбиәләнеп үҫкән бөгөнгө йәштәребеҙ - ауыл балалары ла, ҡала мәктәптәренән дә таусы һөнәрен үҙләштерергә ихлас киләләр беҙҙең колледжға. Төп профиль буйынса таусы техник-технолог һөнәренән тыш, файҙалы ҡаҙылмаларҙы байытыу буйынса технологтар, төҙөүсе-техник, электромеханик, автомеханик, банк эше белгестәре, техник программасы, шулай уҡ һәр заманда ла актуаль булып ҡалыусы декоратив-ҡулланыу сәнғәте һәм халыҡ кәсебе кеүек йүнәлештәр ҙә популярлыҡ яуланы. Аңлашылыуынса, беҙҙең колледжды тамамлаған йәштәр хеҙмәт баҙарында һорау менән файҙаланылыусы төрлө предприятиеларҙа ла үҙенең эш урынын таба аласаҡ. Күп профиллелек тап бына шуны күҙҙә тота ла инде. Төп һөнәренән тыш, студенттарға үҙҙәренең теләге буйынса өҫтәмә белем бирелә. "Автомобилсе", "Йәш токарь", "Ҡыҙыҡлы геология", "Ювелир эше нигеҙҙәре" түңәрәктәрендә шөғөлләнеү ҙә һөнәр һайлауға булышлыҡ итә. Әлбиттә, йәштәрҙең теге йәки был һөнәрҙе һайлауы уның үҙе йәшәгән төбәктә ниндәй уҡыу йорто булыуға ла бәйлелер. Ғәҙәттә йәштәрҙең күбеһе тыуған йорто, ауыл-ҡалаһы, ата-әсәһенә яҡынраҡ урынға уҡырға бара, ләкин тынғы бирмәгән бала саҡ хыялы көслө икән, ныҡлы белемгә эйә булып, үҙенә ышанған хәлдә йәш кеше Мәскәү, Питер, хатта сит илгә сығып китеүе лә ихтимал. Икенсе яҡтан, балаларҙы уҡытыу бит хәҙер ғаиләнең финанс хәленә лә ныҡ бәйле булып китте. Шуға күрә, яратамы был һөнәрҙе бала, юҡмы - ул фәҡәт ата-әсә һүҙен йыҡмайым, тип, осраҡлы, ләкин уңайлы урынға уҡырға инеп китә. Ә ундайҙарҙан аҙаҡ әллә ни өмөт итеп тә булмай, улар барыбер алған белемдәре буйынса китмәй. Шуға күрә, баланың ҡыҙыҡһыныуҙарына, ниндәй һөнәрҙе яҡын күреүенә ғаиләлә күберәк иғтибар һәм йүнәлеш бирергә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ПАРАДОКС

# НИКАХ ТАНЫТМАҺЫ ҺӘМ ИПОТЕКА

"Никах теркәү танытмаһы"на ҡарағанда ипотекаға фатир алғанда банк менән килешеү ҡағыҙы беҙҙе нығыраҡ ҡауыштырҙы, ғаиләбеҙҙе ҡаҡшамаҫ, берҙәм итте, сөнки беҙ 20 йыл буйына фатир хаҡын уртаҡ түләргә бурыслыбыҙ. Уртаҡ бурысыбыҙҙың барлығы беҙгә тормоштоң башҡа ваҡ-төйәк проблемаларына күҙ йоморға булышлыҡ итә", тигәйне өйләнешкәндән һуң ипотекаға фатир һатып алыусы йәштәр.

Ысынлап та, был осраҡта беҙ уртаҡ бурыстың ғаиләне һаҡларға ярҙам итеүсе сәбәп икәненә шаһитбыҙ. Был бурыстың матди байлыҡҡа, мөлкәткә ҡағылған өлөшө. Балалар тәрбиәләү, уларға милли рух, белем биреү, оло тормошҡа әҙерләү, ейән-ейәнсәрҙәреңә милләт эстафетаһын тапшырыу - былары инде бурыстың матди булмаған өлөшө.



Шулай ҙа, матди планда бурыслы кеше ни өсөн үлмәй һуң? Халыҡта "Билде биштән быуыу" тигән төшөнсә бар. Шулай уҡ "Һимеҙлек ҡуйға ғына килешә" тигән әйтемде лә иҫкә төшөрәйек. Тимәк, барлыҡ бурыстарынан ҡотолған, тик үҙ мәнфәғәте менән йәшәй башлап тынысланған кеше тапҡан-таянғанын тик үҙе өсөн генә йүнәлтә башлаған саҡта уның менән нимә булғанын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Бурыстарҙан айырмаһын Хоҙайыбыҙ!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда "Йыл ғаиләһе" бөтә Рәсәй конкурсының төбәк этабы башланыуы тураһында иғлан иттеләр. Төбәк Хөкүмәте бойороғона ярашлы, социаль әүҙем ғаиләләр араһында "Өлгө ал" конкурсы 2018 йылдың 15 ноябренә тиклем үтә. Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығына еңеүсегә еңел автомобиль һатып алыу өсөн 600 мең һум күләмендә матди ярҙам күрһәтергә ҡушылған. Аҡсаны Башҡортостан Хөкүмәтенең резерв фондынан алыу күҙалланған.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов һәләтле балаларға булышлыҡ итеү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары, юғары уҡыу йорттары етәкселәре, төбәктең белем биреү учреждениелары вәкилдәре ҡатнашты. Республика Башлығы Башҡортостанда олимпиада хәрәкәтенә, автор мәктәптәренә ярҙам итеү, талантлы сығарылыш уҡыусыларын асыҡлау, оҙатыу һәм беркетеү системаһын үҫтереү мөһимлеген билдәләне.

✓Өфө власы вәғәҙәһен үтәргә һәм Ағиҙел аша иҫке күперҙе июль аҙағына асырға ниәтләй. "Өс аҙна түҙергә ҡалды", - тинеләр ҡала хакимиәтенең оперратив кәңәшмәһендә. Төҙөүселәр, таяу ремонты тамамланған, металл конструкциялары ҡуйыуға әҙерләнгән һәм 10 июлдә уны күтәреп, нығыта башланылар, тип хәбәр итте. Иҫке Ағиҙел күпере ремонттан һуң еңел автомобилдәр өсөн генә тәғәйенләнә, шуның өсөн ингән ерҙә габарит ҡапҡалар ҡуйыласаҡ.

✓Республика Хөкүмәтендәге оперативкәңәшмәлә Башҡортостандың Транспорт буйынса дәүләт комитеты вәкилдәре төбәк селтәрендәге ҙур объекттарҙа ниндәй участкаларҙы быйыл тамамларға күҙаллауҙарын хәбәр итте. Ул: 19 саҡрым Мишкә - Иҫке Балтас юлы; Ҡариҙел йылғаһы аша күпер менән Ҡариҙел ауылының урау юлы төҙөлөшөн дауам итеү; Ҡариҙел ауылындағы урау юлдан Таҙтүбәгә тиклем юл төҙөлөшөн дауам итеү.

✓Башҡортостанда йәйҙең икенсе айы эҫе һауа торошонан башланды. Термометр күрһәткестәре көндөҙ 30 градустан төшмәне. Ай уртаһында эҫе сигенә: 16 июлдән термометр күрһәткестәре 24-26 градустан күтәрелмәй. Күбеһенсә, июль аҙағына тиклем болотло, аҙ болотло, һуңынан бер аҙ ямғыр менән йонсоу һауа торошо көтөлә.

*✓ Бөтөн документтарҙы, ҡағыҙҙарҙың кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә һаҡларға яратҡан әсәйемә ҡайтып һораһам, ул яулыҡ менән бәйләнгән бер төргөнән ҡәҙерләп кенә урап һаҡланған дипломымды сығарып бирҙе.*



ИШАРА

# ДИПЛОММЫ?

## Ул белемле ҡулында ла, белемһеҙ ҡулында ла була ала

**Йәй айҙарында интернетта дипломдарын тотоп төшкән йәштәрҙең фотолары күбәйә. Әлбиттә, был һәр кемдең ҡыуанысლы, мәртәбәле мәлелер. Үкенескә күрә, күп осраҡта ул дипломдарҙың хужалары тормошонда һәм шәхси үҫешендә бер ниндәй файҙаһы булмаһа ла, бөгөн ниндәйҙер уҡыу йортоноң таныгмаһын алыу модаға әйләнгән. "Дипломлы белгес" тип түгел, ә "диплом алған белгес" тип атар инем мин был хәлде.**



Мин үҙем дә "дипломлы белгес" булманым, ә "диплом алыусы" ғына булып сыҡтым юғары уҡыу йортонан. Сөнки мәктәптә алған базама өҫтәп, артыҡ бер ниндәй ҙә мәғлүмәт йәки белем алманым. Уныһын да бала бағып ултырып, ситтән тороп саҡ тамамлап ҡуйҙым. Бәлки, уҡыуҙы ташлаған да булыр инем әле, әсәйем "уҡып бөт инде, уҡып бөт, диплом ал" тип ныҡып уҡытып бөтөрттө. Ә иң ҡыҙығы шунда: мине бер ергә лә дипломыма ҡарап эшкә алманылар. Хатта уны һораған кеше лә булманы. Билдәле редакцияларҙа эшләнем үҙем. 21 йыл хеҙмәт иткәндән һуң, баш ҡалаға эшкә килгәс кенә дипломым кәрәк булды һәм... мин уны эҙләй башланым. Бөтөн документтарҙы, ҡағыҙҙарҙың кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә һаҡларға яратҡан әсәйемә ҡайтып һораһам, ул яулыҡ менән бәйләнгән бер төргөнән ҡәҙерләп кенә урап һаҡланған дипломымды сығарып бирҙе. Минән көсләп алдырған дипломды ваҡытында уға тотторғанмын, был ҡатырғаның кем өсөн ҡәҙерлерәк икәнен белгәнмен инде.

Ә әсәйем ысынлап та дипломдың ҡәҙерен, баһаһын, хаҡын белә торған кеше ине. Бала саҡтың бер мәрәкәһен һаман һөйләп көлөшәбеҙ. Атай менән әсәй талашып китеп, ирештәре шәхси кәмһетеүҙәргә барып етһә (әрләшкәндә берәү ҙә "бисмилла" тип әрләшмәй бит инде), әсәйем бәхәс темаһына тура килһә лә, килмәһә лә, башын ғорур күтәреп: "Мин һиңә диплом менән килдем", - тип ысҡындыра ине. Шул ваҡыт атайым нимә әйтергә белмәй, аптыраңҡырап ҡала һәм "килмәһәң кәрәк" тип мығырлап, "яу яланын" ташлап китә. Был һүҙ ысынлап та шулай көскә эйә булғанмы, әллә ул заман кешеләре өсөн дипломлы белгес булыу шундай юғары кимәл һаналғанмы, һәр хәлдә, хатта ниндәй дәшһәтле холоҡло атайым да "диплом" тигән һүҙҙән баҙап китер ине. Мин дә ул саҡта "Нимә икән ул диплом?" тип баш вата торғайным.

Һуңынан, олоғайғастары ла, был һүҙ ҡабатланып торҙо, беҙ инде көләбеҙ генә. Атайыма һаман тәьҫир итә әле был хәбәр. "Ниңә улай тиһең ул?" тип һорай был тарихты белеп етмәгән йәш килендәре. Әсәйем шунда кинәнеп аңлата. Йәнәһе, ул, һуғыштан һуңғы йылдарҙа ас-яланғас булып, тамаҡ хаҡына бил яҙҙырмай эшләп йөрөп, уҡып, атайһыҙ көйө "кеше булған". Дипломын Башҡортостанға сит өлкәнән килеп, ҡара тирен сығарып тырышып уҡып алған. Шундай белгес сит тарафҡа йүнәлтмә менән эшкә ебәрелеп, "өс класлыҡ мәктәпте лә бөтә алмаған бер һунарсыға" юлдаш була. Заманында төпкөл район ауылдарында тыуып үҫкәндәргә медицина хеҙмәткәренә уҡыу бөтөнләй ишетелмәгән хәл дә булғандыр, күрәһең. Һәм уның үҙен дә юғары баһалағандар, хеҙмәтен хөрмәт иткәндәр. Бына ошо статусты тотто ул ғүмере буйы.

Уның да бер ҡыҙығы булды. Сираттағы тапҡыр "Мин һиңә диплом менән килдем", тигәндән һәм атайым сығып киткәндән һуң, әсәйемә: "Ҡана күрһәт әле шул дипломыңды, тыуғандан алып ишетәм, күргәнем юҡ", - тип өндәштем. Был эҙләй башлағайны - юҡ диплом. Бөтөн китапханаһын, һандыҡтарын әйләндереп сығарҙы. Әлеге атайыма ла ауҙы ғәйеп. Унан саҡ иҫенә төштө: районға медиктарҙың музейына һорап алғандар икән. Юғиһә, бик ҙур ғауға сыға яҙғайны.

Ауылда беҙҙең шундай дипломлы белгес булып килеп, ғүмерҙәрен башкөллө үҙ хеҙмәттәренә арнаған хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар байтаҡ булды. Иң ололарҙан фельдшер әсәйем, уҡытыусылар Земфира апай, Вәзимә апай һәм башҡалар. Ун туғыҙ-егерме йәшлек кенә көйө килеп, индәренә оло яуаплылыҡ ала алыуҙарын әйт әле. Училище белеме менән генә! Уларҙың үҙ эштәрен яҡшы белеүҙәренә һәм халыҡты сифатлы хеҙмәтләндереүҙәренә шундай күнеккәндәрҙер - шул өлкәлә нимәнелер белмәйҙер йәки яңылышалыр тигән уй берәүҙең дә башына килмәҫ ине.

Мин үҙ эшемде, башҡарған хеҙмәтемде беләм һәм яратам, әммә әсәйем кеүек "Мин диплом менән килдем" тип ышанысլы итеп әйтә алмайым. Сөнки, үрҙә әйткәнемсә, был белемде миңә дипломым түгел, ә тап шул дипломлы белгес булған уҡытыусым һалған. Һәм, моғайын, бөгөн күптәр бындай һүҙҙәрҙе әйтергә ҡыймайҙыр. Түләүле уҡыуҙар, һатылған имтихандар, белемһеҙ студенттар дипломдарҙың баһаһын төшөрөп ташланы. Ә училищеларҙың кимәле ҡалай түбәнәйҙе. Заманында иң төплө һәм көслө уҡыу йорттары һаналған Сибай, Белорет педучилищелары бөгөн ябылыу сигендә, уларҙың дипломы менән эшкә лә төшөп булмай. Хатта институт белеме менән килгән йәш кешегә лә хеҙмәт юлын башлау өсөн урынлашып китеүе ауыр. Был эш урындары булмағандан ғына түгел, ә, беренсенән, йәш хеҙмәткәрҙең үҙ һөнәрен ентекле белмәүенән, икенсенән, дипломдың хужаһының белем кимәлен гарантияламауынан.

Тимәк, бөгөнгө дипломдар элекке көстәрен юғалтҡан, артыҡ абруйҙары юҡ булып сыға. Бының аңлатмаһы ла ябай, бөгөнгө диплом белемле ҡулында ла, белемһеҙ ҡулында ла булырға мөмкин. Күңелһеҙ күренеш, әлбиттә. Боронғо белгестәр әйтмешләй, "Мин һеҙгә диплом менән килдем!"де аҡлай алыу ҙа ҙур бурыс бит әле.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЕҘҘЕ ТАНЫП ТОРҺОНДАР

***Рәмил ҒӘЙЗУЛЛИН, Башҡортостандың халыҡ артисы, ҡурайсы:*** Халыҡҡа әйтергә теләгән һүҙҙәр бик күп. Шулай ҙа, иң мөһиме, башҡорт халҡына берҙәмлек кәрәк. Ниндәй генә хәл ителәһе мәсьәләләр килеп тыуғанда ла бер һүҙле булып, бергә уйлашып ҡарар ҡабул итергә, үҙ мәнфәғәтебеҙҙе күмәкләшеп яҡларға. Шуныһы ҡыуанысլы, хәҙер СССР заманындағы кеүек, халыҡтарға ҡаты тыйыуҙар юҡ, теләгән кеше туған телендә һөйләшә, уҡый, балаһын тәрбиәләй, мәҙәниәтен үҫтерә. Был юлда ниндәйҙер ҡаршылыҡтар килеп сыға икән, халыҡ үҙ фекерен белдерә ала.

Әйткәндәй, бына ошо азатлыҡты йәштәр ҙә тойоп үҫә, улар беҙҙең быуын кешеләренә ҡарағанда ҡыйыуыраҡ, уҫалыраҡ та әле. Тик халҡыбыҙҙың демографик хәлен яҡшыртырға кәрәк. Башҡорт халҡы тыуған ерен яҡлап, күпме ихтилалдарҙа, уртаҡ илебеҙҙе һаҡлап, һуғыштарҙа ҡатнашып, халыҡ иҫәбен алғанда бүтән милләт булып яҙылырға мәжбүр булған сағында ла Рәсәйҙә иң күп һанлы халыҡтарҙың береһе булып ҡала килгән. Ғалимдар милләтебеҙ яйлап ассимиляцияға бирелеп, телебеҙ юғалыуы ихтимал тип иҫәпләгәндә лә йәшәп киләбеҙ әле. Киләсәктә лә һәр башҡорт ғаиләһе кәм тигәндә өс бала үҫтерергә тейеш. Бына минең дүрт улым бар, улар әлеге кеүек әсәлек капиталы, аҙ процентлы ипотека йә башҡа социаль ярҙам булмаған саҡта тыуып үҫтеләр. Хөкүмәттән ярҙам көтөп ятмайынса, һәр кем үҙ йүнен үҙе күреп, милләтенә һәм иленә терәк булырҙай ул-ҡыҙҙар үҫтерһен, ғаиләһендә үк рух, туған теленә һөйөү тәрбиәләһен.

Сәнғәт темаһына килгәндә инде, хатта ошонда ла башҡорт халҡының бер төптән уйлауына, бер юҫыҡта эшләүенә мохтажлыҡ кисерәбеҙ. Башҡорт сәнғәте үҫешһен һәм донъя кимәлендә билдәлелек яулаһын өсөн чиновниктар ҡамасау итмәһен ине. Сөнки сәнғәттәге торғонлоҡ сәйәсәттәге, иҡтисадтағы йә башҡа өлкәләрҙәге торғонлоҡ кеүек үк - уның халыҡ өсөн эҙемтәләре насар. Сәнғәт аша халыҡты донъяға танытырға, милләт-ара бәйләнештәр булдырырға мөмкин. Ә бөгөнгө мәғлүмәти заманда башҡорт халҡы тураһында башҡаларҙың да белеүе, беҙҙең мәҙәниәтебеҙ, сәнғәтебеҙ менән таныш булыуы мөһим. Ҡайҙа барғанда ла "Был - башҡорттар!" тип танып торһондар, ә беҙ ғорурланып шул исемде күтәреп йөрөйөк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйыл Баймаҡ районында юл ремонтына һәм төҙөлөшөнә 176,7 миллион һум бүленгән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Транспорт буйынса дәүләт комитетында. Сәрмән - Амангилде - Баймаҡ (145-152-се саҡрым), Магнитогорск - Ира (115-116-сы саҡрым, 125-127-се саҡрым), Сибай - Күсей - Хәлил (15-се саҡрым) юлдарында капиталь ремонт күҙалланған. Районда, Әбйәлил районы сигендә Сибай - Күсей юлында Төйәләҫ йылғаһы аша күпер төҙөлөргә тейеш. Был маҡсатҡа 10 миллион һум ҡаралған. Шулай уҡ 1,7 миллион һум Темәс ауылында Шырҙы йылғаһы аша күперҙе йүнәтеп бөтөүгә бүленгән.

✓Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы һәр ҡайһыһы 500 мең һум күләмендә дәүләт ярҙамы аласаҡ 60 йәш белгесте һәм 300-шәр мең һум аласаҡ 21 урта махсус белем биреү йортон тамамлаусыны һайлап алған. Финанс ярҙам Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов бойороғона ярашлы республика бюджетынан бүленә. Комиссия бөтәһе 34 райондағы 93 ауыл хужалығы предприятиеһынан ғаризалар алған. Юғары белемле белгестәр буйынса - 69, урта белемлеләр буйынса - 24 ғариза килгән, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында.

✓Башҡортостандың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы архитектура ҡомартҡылары исемлегенә дүрт бинаны индереү тураһында бойороҡ сығарҙы. Улар иҫәбендә - Өфөлә Аксаков урамындағы 73-сө йортта Башҡорт дәүләт педагогия университетының дөйөм ятағы, Благовещенда Ленин урамы, 1/1 адресы буйынса урынлашҡан Земство дауаханаһы бинаһы, Бөрйән районының Иҫке Монасип ауылындағы мәсет, Асҡын районының Михайловка ауылындағы Михаил-Архангел сиркәүе.

✓Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы 2018 йылдың 9 сентябрендә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын һайлауҙа тауыш биреү өсөн биналар һәм тауыш биреү йомғаҡтарын билдәләгәндә, һайлау һөҙөмтәләрен билдәләгәндә ҡатнашыу өсөн киң мәғлүмәт саралар вәкилдәрен аккредитациялау тураһында иғлан итте. Был мәсьәлә менән бәйле бөтә һорауҙар буйынса Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы Аппаратына мөрәжәғәт итергә, телефон: (347) 218-11-15.

ҠЫҪҠАСА

# САБЫЙЫҢ ТЫУҘЫМЫ?

✓ **Башҡортостанда тағы ла күберәк ғаиләләр тәүге сабыйы тыуғанда 300 мең һум күләмендә түләүгә иҫәп тота ала.** Башҡортостан Хөкүмәте Президиумы ултырышында ғаиләлә тәүге баланың республикабыҙ биләмәһенән ситтә тыуыуы ла мөмкин тип аңлаттылар. Бынан тыш, таныҡлыҡтың ғәмәлдәге ваҡыты 6 айҙан 9-ға тиклем артырыла. Шулай уҡ беренсе балалары 2017 йылдың 1 ғинуарынан 2018 йылдың 1 мартына тиклемгә осорҙа тыуған ғаиләләр өсөн ғаризалар һәм документтар тапшырыу ваҡыты 6 айға арттырылды. Шулай уҡ быға тиклем Тәртип шарттарына ярашлы булмау сәбәпле кире яуап алған ғаиләләр гәмәлдәге Тәртипкә үҙгәрештәр үҙ көсөнә ингәндән һуң ағымдағы йылдың 1 сентябренә тиклем ҡабаттан документтарын тапшыра ала. Ағымдағы йылда пособие түләүгә 325 миллион һум күҙаллланған. Өс йыл дауамында был программа буйынса сертификаттарҙы ике меңдән ашыу кеше алыр тип көтөлә

✓ **Июлдә Рәсәй Фәндәр академияһының Урал бүлексәһе Үҫемлектәр һәм хайуандар экологияһы институты ғалимдары тотош мәмерйәләр комплексын өйрәнеү өсөн Башҡортостанға килә.** "Был бик мөһим бурыс, сөнки хатта бороңғо арыҫландарҙың бик күп һөйәге табылған Иманай мәмерйәһен ("Башҡортостан" милли паркында) милли парктың дәүләт инспекторы осраҡлы тапҡан. Шуға, йыл дауамында яңы мәмерйәләр тураһында мәғлүмәт йыйабыҙ, ялан миҙгеле башланғас, был мәмерйәләргә сығырға тырышабыҙ. Июль башында Көньяҡ Уралға сәфәр тотабыҙ, ул Башҡортостандың көньяҡ өлөшө: унда мәмерйәләр төркөмө, уларҙа яңыраҡ Башҡортостан спелеологтары әлегә билдәһеҙ хайуандарҙың ҙур һөйәк өйөмөн тапҡан", - ти Институттың өлкән ғилми хеҙмәткәре Дмитрий Ғимранов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2015 йылда "Башҡортостан" милли паркында биш меңдән ашыу элекке арыҫландар һөйәктәре табылған. Улар үҙҙәренең Африкалағы замандаштарынан 1,5 тапҡыр өлкәнерәк.

✓ **"АвтоВАЗ" концерны автомобиль кузовы һәм юл араһында тоташтырыу звеноһы ролен уйнаусы деталдәр, узелдар һәм механизмдар йыйылмаһында (подвеска) проблемалар сәбәпле, Рәсәйҙә 7,2 меңдән ашыу Lada Xray автомобилен ҡайтарып ала.** "Росстандарт" Lada Xray маркалы 7220 автомобилдә ҡайтарыу буйынса саралар уҙғарыу тураһында хәбәр итә. Саралар программаһын "АвтоВАЗ" асыҡ акционерҙар йәмғиәте күрһәтә", - тиелә хәбәрҙә. 2017 йылдың ноябренән һатылған автомобилдәрҙә ныҡлы суйын урынына һороһонан эшләнгән боролоу йоҙроҡсаһында газ бушлыҡтары барлыҡҡа килеүе асыҡланған. Ҡайтарып алыу сәбәбе булып тора. Белгестәр был моделдәрҙә боролоу йоҙроҡсаһының эшен тикшерә һәм кәрәк булғанда деталде алмаштыра. Ремонт бушлай башҡарыла. Ҡайтарып алынасаҡ автомобиль хужаларына хат йәки телефон аша машинаны яҡындағы дилер үҙәгенә күрһәтеү кәрәклеге хаҡында белдереү ебәрелә.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

**Был аҙнала ҡала округы хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмә башҡаларынан бер ни тиклем айырылып торҙо. Әлбиттә, был юлы ла көнүҙәк мәсьәләләргә, план буйынса ҡаралған ремонт һәм реконструкция эштәренә ҙур иғтибар бирелде. Әммә барыбер ҙә Өфө ҡала округы хакимиәте делегацияһының Ирек Ялалов етәкселегендә Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астананың - 20, "Бер пояс, бер юл" инициативаһының 5 йыллығына арнап ойошторолған "Глобаль Ебәк юлы. Ебәк юлы илдәре ҡалалары мэрҙары саммиты"ның беренсе форумында ҡатнашыуы һәм туғандаш ҡаланың үҫеше менән танышыу тәьҫораттары төп урында торҙо.**

# СИТ ЕРҘӘРГӘ БАРЫП...

## фәһем алып



"Форум ҡалаларҙың һәм төбәктәрҙең яңы сифатлы кимәлен формалаштырыу маҡсатында ҡалалар һәм хөкүмәттәр лидерҙарын, тармаҡ эксперттарын берләштергән эксклюзив майҙансыҡ булып торҙо, - тип белдерҙе Ирек Ишмөхәмәт улы. - Ике көн дауамында ҡатнашыусылар төбәк иҡтисади партнерлығының яңы механизмдарын билдәләү, төрлө өлкәләрҙәге хеҙмәттәшлек, шулай уҡ тыныслыҡ булдырыуға ярҙам итеү һәм ҡалаларҙы тотороҡло үҫтереү юлын эҙләне".

Һөйләшеүҙәр, фекер алышыуҙарҙы йомғаҡлап, сарала ҡатнашыусылар Ебәк юлы илдәре ҡалалары мэрҙарының клубын төҙөргә ҡарар итә. Уның сиктәрендә мәҙәниәт, спорт, смарт-технологияларҙы, транспортты, инфраструктураны үҫтереү буйынса саралар үткәреләсәк. Шулай уҡ, клуб менән бер рәттән, берҙәм мәғлүмәт-аналитика ресурсын булдырыу тәҡдиме лә хуплана. Унда ҡалалар, уларҙың иң яҡшы муниципаль тәжрибәләре, саралар календары урын алырға тейеш һәм календарға ярашлы, клуб ағзалары уларҙа ҡатнашыуҙы алдан планлаштырыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ, кәрәкле документтар менән танышасаҡ.

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының сығышынан был сәфәрҙең уның күңелендә ыңғай тәьҫораттар менән бер рәттән, бер аҙ көнләшеү тойғолары тыуҙырыуы ла һиҙелде. "Астана - ҡола яланда ҡала төҙөлөшөнөң заманса өлгөһө булып барлыҡҡа килгән XXI быуат баш ҡалаһы, - тине Ирек Ялалов. - Улар донъяның иң яҡшы өлгөләренә йүнәлеш ала. Архитектураға килгәндә, беҙҙең архитекторҙарға унда барып, үҙ күҙҙәре менән күреп, өйрәнеп ҡайтырға кәрәк. Ҡаҙаҡтар постсовет мәктәбе архитекторҙарынан баш тартҡан. Байтирәктән башҡа барлыҡ объекттар ҙа сит ил архитекторҙары тарафынан проектланған. "Үҙебеҙҙә кадрҙар үҫтереп булмаймы ни?" - тип һорайым. "Юҡ, проектлау мәсьәләләрендә шул тиклем алға киткән һәм беҙҙең архитекторҙар иҫәпкә алмаған ҙур йүнәлештәр бар", - тип яуапланылар. Мин был турала йыш ҡабатлайым: тәү сиратта уңайлылыҡ һәм объекттарҙы артабан ҡулланыу, тотоу мәсьәләләренә иғтибар итергә кәрәк. Бында төп критерий булып бинаның, ҡоролманың бер квад-

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҮҘ ФЛАГЫБЫҘ КҮТӘРЕЛҺЕН



**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 54-се ултырышында депутаттар "Башҡортостан Республикаһының дәүләт символикаһы тураһында"ғы Башҡортостан Республикаһы законына үҙгәрештәр индереү хаҡында" закон проектын ҡабул итеү өсөн тауыш бирҙе.**

Проект дөйөм белем биреү ойошмалары биналарына, Рәсәйҙең дәүләт флагы кеүек үк, Башҡортостандың дәүләт флагын даими урынлаштырыуҙы күҙ уңында тота. Бынан тыш, милек формаһының ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, дөйөм белем биреү ойошмалары үткәргән күмәк саралар ваҡытында республика флагын күтәреү йәки ҡуйыу осраҡтары тәҡдим ителә. Закон проектына ярашлы, хәҙер дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡыу йылы башланыуға һәм тамамланыуға арналған тантаналы йыйылыштарҙа, уҡыу йылы башланған көндә, дәүләт һәм муниципаль байрамдарҙа, шулай уҡ һәйкәлдәрҙе, дәүләт байрамдарына арналған тантаналы йыйылыштарҙы асҡанда Башҡортостандың Дәүләт гимнын башҡарырға кәрәк.

# ХАЛЫҠ КӘСЕБЕНӘ - ЯРҘАМ



**Башҡортостанда "Халыҡ художество кәсептәре тураһында" һәм "Мәҙәниәт тураһында" закондарға төбәк парламенты ҡабул иткән төҙәтмәләр үҙ көсөнә инде. Хәҙер дәүләт власы органдары халыҡ художество кәсептәре ойошмаларына ярҙам күрһәтергә хоҡуҡлы.**

"Халыҡ кәсептәре иҡтисадҡа түгел, ә күберәк мәҙәниәт өлкәһенә ҡараған тармаҡ. Халыҡ кәсептәре тауарҙарының күпселеге - ҡулдан эшләнгән һәм берәмләп һатыла торған әйбер. Был хеҙмәт - бик мәшәҡәтле, күп ваҡыт һәм көс талап итә, ә уның өсөн ҙур аҡса түләүселәр аҙ. Әлбиттә, ха-

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда яңы наград - "Башҡорт халыҡ геройы" миҙалы барлыҡҡа киләсәк. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы наградаһын иң яҡшы эскизын уйлап сығарыуға асыҡ конкурста ҡатнашырға саҡыра. Конкурс эштәре 2018 йылдың 1 октябренә тиклем электрон формала "Башҡорт халыҡ геройы" миҙалын уйлап сығарыу буйынса конкурс" билдәһе менән kurultay-ufa@mail.ru адресына ҡабул ителә.

✓19 июлдә Күп функциялы үҙәк офистарында Роспотребнадзор идаралығы вәкилдәре эшҡыуарҙарға төрлө һорауҙар буйынса консультация үткәрә. Консультациялар бушлай, алдан яҙылырға кәрәкмәй. Акция "Аркада" (Ғөбәйҙуллин урамы, 6) һәм "Башҡортостан" (Менделеев урамы, 205а) сауҙа үҙәктәрендә урынлашҡан күп функциялы үҙәктәрҙә иртәнге 10-дан көндөҙгө 4-кә тиклем уҙа. Бәйләнеш телефоны: 246-55-33.

✓Театр сәнғәте өлкәһендә өс тиҫтәнән ашыу вәкил - Рәсәйҙең Театр эшмәкәрҙәре союзы дөйөм Рәсәй йәмғәт ойошмаһынан йәш мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә хөкүмәт стипендияһы лауреаттары иғлан ителде. Был исемлектә Башҡортостандың ике вәкиле бар. Ай һайын федераль ҡаҙнанан 20 000 һум күләмендә стипендия алыусылар иҫәбендә - Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры режиссеры Илсур Ҡаҙаҡбаев һәм Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры рәссамы Илнур Слявчин.

✓Футболға мода үҙ емештәрен бирҙе: Башҡортостанда сабыйҙарға йышыраҡ Рәсәй йыйылмаһы футболсыларының исемдәрен ҡуша башлағандар. Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетында әйтеүҙәренсә, Ҡыйғы районында Роналдоға оҡшаш Ринальдо исемле малай донъяға килгән. 2018 йылда Башҡортостанда ата-әсәләр балаларына икеләтә исемдәр ҡуша башлаған: Александра-Эмилия һәм Александра-Амалия - апалы-һеңлеле, Ғәли-Йән, Руслан-Амаль, Мөхәммәд-Йәзид, Марк-Ямач, Эрнест-Текин, Абдул-Кәрим.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында өс урамды ноябрь айына тиклем иллюминация менән биҙәү күҙаллана. Дәүләт һатып алыуҙары сайтында урынлаштырылған документта билдәләнеүенсә, эштең иң ҙур хаҡы - 115 миллион 121 мең һум. Аукционда еңгән предприятие Цюрупа - Ибраһимов бульварынан Зәки Вәлидигә тиклем, Беренсе май - Ульяновтарҙан Машина эшләүселәргә тиклем, Октябрҙең 50 йыллығы - Минһажевтан Әйгә һәм Минһажевтан Үҙәк баҙарҙағы ҡулсаға тиклем урамдарҙа яҡтыртыу системаһы монтажын эшләргә тейеш.

✔ ***Астана Өфөнөң туғандаш ҡалаһы булып тора һәм улар беҙҙән күп өлкәлә алда бара. Бында мәсьәлә уларҙың бюджетының беҙҙекенән тиҫтәләрсә тапҡырға ҙурыраҡ булыуында ғына түгел...***



рат метрын тотоуҙың күпмегә барып баҫыуы тора. Беҙ ҙә матур йорттар төҙөйбеҙ, әммә һуңынан уларҙы техник хеҙмәтләндереү, тотоу йәһәтенән бөлгөнлөккә төшәбеҙ. Грамоталы, уйланылып эшләнгән объектта тотош комплексты хеҙмәтләндерергә Астанала 1 кеше кәрәк, ә беҙҙә 20 кеше эшләй. Уларҙа подвалдағы сүп-сар камералары тутламаҫ тимерҙән, беҙҙә асбест-цемент ҡатнашмаһы, тағы ла әллә ниндәй осһоҙло материалдарҙан. Әлбиттә, беҙ хеҙмәтләндереү өсөн күберәк сығым тотонабыҙ.

Йәки беҙ танышҡан комплекста тергеҙелеүсе энергияның барлыҡ төрҙәре лә ҡулланыла: ҡояш батареялары, ел энергияһы. Тротуарҙан китеп барғанда ла энергия тарала. Бына ошо була инде XXI быуаттың комплексты төҙөлөшө. Ә торлаҡтың квадрат метрының хаҡы беҙҙәге кеүек. Үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнап ятып булмай, барыбыҙ, күрегеҙ, артабан төҙөүсе компанияларға етди талаптар ҡуйырға кәрәк. Әлегә улар тар ҡарашлы, бары тик үҙҙәренең иҡтисади файҙаһын ғына уйлай. Торлаҡ төҙөлөшө тармағында яңы стандарттар, һынылыш булырға тейеш".

Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, бөгөн ҡалала 80 самаһы бейек күп фатирлы йорт төҙөлә, бынан тыш, 120 объект бизнес тармағына тура килә. Дөйөм алғанда, барлығы 700 объект төҙөлә. Уларҙың һәр ҡайһыһы ҡала биҙәге булыуы, төҙөүселәрҙең иң яҡшы стандарттарға йүнәлеш алыуы шарт.

"Астана Өфөнөң туғандаш ҡалаһы булып тора һәм улар беҙҙән күп өлкәлә алда бара. Бында мәсьәлә уларҙың бюджетының беҙҙекенән тиҫтәләрсә тапҡырға ҙурыраҡ булыуында ғына түгел. Унда баш ҡаланы төҙөүгә Хөкүмәт тарафынан да ҙур сумма бүленә. Мәсәлән, беҙҙең йыллыҡ бюджет яҡынса 600 миллион доллар булһа, Астана ике йылда ике миллиард доллар торған тиҙ йөрөшлө транспорт системаһын төҙөп бөтөргә планлаштыра. Бына улар баш ҡаланың инфраструктураһын үҫтереүгә ниндәй суммалар һала! Проект Ҡаҙағстан Республикаһы Хөкүмәте, халыҡ-ара банктар кредиттары, Ҡытай Халыҡ Республикаһы инвестицияларына башҡарыла. Әммә Астананың тиҙ үҫеүенең тағы бер сере бар: һәр өлкә (акимиәт) баш ҡалала бер инфраструктура объекты төҙөп тапшыра. Әле төп иғтибар парктарға, скверҙарға, велоюлдарға бирелгән. Өфө менән туғандаш Павлодар ҡалаһы акимиәт менән берлектә яҡтыртылған, ҡояш батареялары урынлаштырылған 56 километр резина велоюлы һалған. Икенсе акимиәт 2 гектар майҙанда суператтракциондар, ҡоро фонтандар булған һоҡланғыс парк булдырған. Йәғни ҡаҙаҡтар баш ҡаланы тотош ил менән төҙөй. Был проект тотош илде берләштерә", - тип, Ирек Ялалов, бәлки, был алымды Башҡортостанда ла ҡулланырғалыр, тигән һорау ҡуйҙы. Райондар аҡсаһыҙлыҡтан интеккән заманда, уларҙан ниндәйҙер объект төҙөтөү, булған аҡсаны бары тик баш ҡалаға ғына һалыу дөрөҫ тә булмаҫ, моғайын. Әммә ҡала хакимиәте башлығы тәжрибәне бәләкәй һәм башҡарып булырлыҡ өлкәнән башларға тәҡдим итте: урындар бүлеп биреп, һәр район үҙенең, арҙаҡлы шәхестәренең аллеяһын булдырыуҙан башлаһын. Хәл итмәслек мәсьәлә түгел, бары тик республиканың муниципаль район хакимиәттәре һәм баш ҡалала йәшәүсе яҡташтарының күтәреп алыуы ғына кәрәк.

Аллея тигәндән, хакимиәт делегацияһы Астанала Өфө ҡалаһы исемендәге аллея булдырыу тураһында һөйләшеп килешкән. Астана үҙәгендә, туристар йөрөгән төп маршруттар объекттары эргәһендә бүленгән территорияға сентябрь-октябрҙә Башҡортостандан үҫентеләр алып барып ултыртылырға, унда тейешле билдә ҡуйылырға тейеш.

"Был беҙҙең өсөн ҙур мәртәбә, сөнки Астана бизнестың, мәҙәниәттең, финанстарҙың етди Евразия үҙәгенә әйерелә бара. Әлбиттә, улар ҙа беҙҙең яҡтан тәҡдимдәр көтә һәм ҡаланы төҙөкләндереүҙә, ниндәйҙер арт-объекттар урынлаштырыуҙа ярҙам итергә әҙерҙәр, - тип белдерҙе Ирек Ялалов һәм республика оҫталары баҡсаһына таш та ырғытты. - Беҙ һынлы ижад оҫталарына яҡшы муниципаль майҙандар биргәнбеҙ, коммуналь сығымдарҙы үҙебеҙ күтәрәбеҙ. Улар яғынан да яуап булырға тейештер бит. Бөтөн ижади ҡеүәтте файҙаланырға, уларҙың барыһын да был эшкә йәлеп итергә кәрәк. 5 километрға һуҙылған Ағиҙел яр буйы ҡулланылыуға тапшырылғас, уны ла арт-объекттар менән тулыландырыу бурысы тора. Әммә Астананан һуң беҙҙә был йүнәлештең һүлпәнлеге, уларҙы башҡарыу сифатының түбәнлеге күҙгә ташлана. Сифатлы арт-мөхит булдырыу - ул эстетика һәм ҡала уңайлығының бер өлөшө генә түгел, ул ҡаланың туристик потенциалы ла".

Күрше тауыгы ҡаҙҙай, тигән кеүек, әлбиттә, үҙаллы дәүләттең баш ҡалаһы менән сағыштырыу был осраҡта урынһыҙ ҙа кеүек. Әммә ололарҙың, фәһем алыр өсөн булһа ла ҡунаҡҡа йөрө, тигәндәрендә лә хаҡлыҡ бар. Ә инде хыял, ниәттәр, пландар өсөн өлгө, уларҙы ысынбарлыҡ итергә теләк бар икән, ул ҡасан да булһа тормошҡа ашасаҡ бит!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## ҠЫҪҠАСА

# АҘ ТЫУАЛАР...

✔ **Башҡортостанда йыл башынан тыуымдың кәмеүе һәм үлемдең артыуы теркәлгән.** Ағымдағы йылдың биш айында төбәктә 19 341 бала тыуған. Быйтыр ошо осорҙа 759 балаға күберәк - 20100 сабый донъяға килгән. Йыл башынан республикала 21 824 кеше үлгән, ул үҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 108-гә күберәк (21716). Халыҡтың тәбиғи кәмеүе 2483 кеше тәшкил итә. Тик май айында ғына Башҡортостанда 4074 бала тыуған, 4475 кеше үлгән. Белгестәр ғаилә ҡороуҙарҙың кәмеүен һәм айырылышыуҙар һанының артыуын теркәй. Башҡортостанда 2018 йылдың ғинуарынан майына тиклем 7212 никах теркәлгән. Быйтыр ошо уҡ осорҙа 7959 пар өйләнешкән. Быйыл йыл башынан - 6341 ғаилә, үҙған йылдың биш айында 6321 ғаилә тарҡалған.

✔ **8 июлдән Рәсәй Федерацияһының Енәйәт кодексына интернет аша һәм киң мәғлүмәт саралары ярҙамында ҡиммәтле ҡырағай хайуандарҙы һәм һыу биоресурстарын, шулай уҡ уларҙың өлөштәрен һәм дериваттарҙы һатҡан өсөн яуаплылыҡты ҡәтғиләштергән үҙгәрештәр үҙ көсөнә инде.** Быының өсөн иң ҙур яза - 1,5-3 миллион һум күләмендә штраф һәм туғыҙ йылға иректән мәхрүм итеү, тип хәбәр итеlә Дәүләт Думаһы сайтында. Законда билдәләнгәнсә, хайуандарҙы, һыу биоресурстарын законһыҙ һатып алған йәки һатҡан өсөн ике йылға тиклем иректән мәхрүм итеү менән 500 мең һумдан 1,5 миллион һумғаса күләмдә штраф һәм өс йылға ҡәҙәре мәжбүри эш йәки шул уҡ күләмдә штраф менән дүрт йылға тиклем иректән мәхрүм итеү рәүешендә яза ҡаралған.

✔ **Башҡортостан буйынса "Ҡыҙыл Тәре" Рәсәй йәмғиәт ойошмаһы янғында зыян күргәндәргә аҙыҡ-түлек йыйылмаһы, гигиена кәрәк-ярақтары, урын-ер әйберҙәренән гуманитар ярҙам күрһәтеүен дауам итә.** 2018 йылда янғын һөҙөмтәһендә йорто йәки мөлкәте зыян күргән йә иһә янған граждандар ярҙам һорап мөрәжәғәт итә ала. Үҙең менән янғын тураһында белешмә, йәшәгәндәрҙең теркәү документтары булырға тейеш. Гуманитар ярҙамды Өфөләге Карл Маркс урамы, 53 адресы буйынса урынлашҡан "Ҡыҙыл Тәре" офисында алырға була. Өҫтәмә һорауҙарҙы (347) 251-64-11 телефоны буйынса бирергә йәки redcrossufa @bk.ru электрон почтаға юлларға мөмкин.

✔ **Рәсәй Президенты Владимир Путин сит ил паспорты биреү өсөн дәүләт пошлинаһын 3,5 меңдән 5 мең һумғаса арттырыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы.** Закон тарафынан 14 йәштән кесе граждандарға сит ил паспорты биреү өсөн дәүләт пошлинаһы 1,5 меңдән 2,5 мең һумғаса күтәрелә. Пошлина электрон мәғлүмәт йөрөтөүсе яңы быуын паспорттарына ғына арттырыла. Шулай уҡ водитель таныҡлығының яңы өлгөһө өсөн, шул иҫәптән юғалған йәки яраҡһыҙ булған таныҡлыҡ алмашы өсөн дә, дәүләт пошлинаһы 3 мең һум тәшкил итәсәк.

лыҡ художество кәсептәре дәүләт ярҙамына мохтаж", - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. Художество кәсептәренә дәүләт ярҙамы тураһында мәсьәлә алдан тикшерелде һәм федераль кимәлдә ыңғай хәл ителде. Башҡортостан парламенты ошо норманы республика ҡануниәтендә үстерергә хәл итте. "Рәсәйҙәге күп милләтле төбәктәрҙең береһе булған республикабыҙ өсөн бындай норма айырыуса көнүҙәк. Беҙҙә төрлө халыҡ вәкилдәре йәшәй. Барыһы ла үҙҙәренең мәҙәни йолаларын, шул иҫәптән халыҡ художество кәсептәрен һаҡлау менән ҡыҙыҡһына", - тип өҫтәне Константин Толкачев.

# ҮҘЕҢӘ ЭШЛӘЙҺЕҢМЕ?



**Рәсәйҙең дүрт төбәгендә үҙенә эшләгән граждандар өсөн яңы һалымды һынап ҡарайҙар. 2019 йылдың 1 ғинуарынан Мәскәүҙә һәм Мәскәү өлкәһендә, Татарстанда һәм Калуга өлкәһендә үҙенә эшләгән граждандар (бала ҡараусылар, репетиторҙар, сирлене тәрбиәләүселәр, ваҡ кәсепселәр) махсус ҡушымта ярҙамында килемдән һалым түләргә тейеш.**

Ошо хаҡта федераль киң мәғлүмәт саралары хәбәр итә. Физик берәмектәргә хеҙмәт күрһәткәндәргә 3 процентлыҡ пошлина һалына. Юридик берәмектәр менән эшләгәндәр 6 процентлыҡ һалым түләргә бурыслы. Был йыймдар үҙенә эшләгән граждандарҙың бюджетҡа күсермәгән НДФЛ һәм страховка иғәнәләрен алыштырыуға йүнәлтелгән. Властар рәсми булмаған мәшғүллектән юғалтыуҙы 500 миллиард һумға баһалай. 2017 йылға тиклем шәхси эшҡыуар булып теркәлеү ошондай граждандарға рәсми майҙанға сығыу өсөн берҙән-бер мөмкинлек ине. Быйтыр хөкүмәт уларға шәхси эшҡыуарлыҡты теркәү урынына патенттар һатып алырға һәм бер үк ваҡытта 2019 йылға тиклем һалым каникулдары иғлан итергә тәҡдим итеп, күләгәнән сығарырға маташты. Ләкин ярты йыл эсендә 964 кеше генә теркәлде, тип хәбәр итте Федераль һалым хеҙмәте. Үҙенә эшләгән кеше эшен рәсмиләштергән осраҡта, хеҙмәттәренең хаҡы артыр һәм, ахыр сиктә, клиенттарға һәм яллаусыларға түләргә тура килер, моғайын, тип билдәләй экспертар.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бәйғәмбәр тырнағы

❖ Бәйғәмбәр тырнағы төнәтмәһен ангина, проктит, парапроктиты дауалайҙар. 2 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡоялар, 15 минут төнәтәләр, бүлмә температураһында 45 минут һыуыталар. Йылы көйөнә көнөнә 2-3 тапҡыр 1-2-шәр ҡалаҡ эсәләр. Һалҡын урында 2 тәүлектән артыҡ һаҡларға ярамай. Парапроктитта бәйғәмбәр тырнағы төнәтмәһенә шул уҡ күләмдә 3 процентлы бор кислотаһы өҫтәйҙәр һәм клизма итеп ҡулланалар.

❖ Тәбиғәттә үҫкән бөтөн һары үлән дә үт ҡыуыу сифатына эйә.

❖ Халыҡ медицинаһында бәйғәмбәр тырнағы һуты ла ҡулланыла. 1 стакан йылы һөткә 1 ҡалаҡ бал, 20-40 тамсы һут өҫтәп, стенокардия, гипертония, атеросклероз, невроз һәм климакс мәлендә хәл яҡшырғансы эсергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ҡабул итергә.

### Холецистит

❖ Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ә балғалаҡ һитә ашағыҙ. Дауаланыу курсы - 2-3 ай. Һитә менән дауаланғанда көнөнә 2 тапҡыр бал ҡушылған һыу эсегеҙ.

### Мәтрүшкә

❖ Аллергияның ҡайһы бер төрҙәренән мәтрүшкә ярҙам итә. 2 балғалаҡ үләнгә 1 стакан эҫе һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда яртышар стакан эсергә.

### Үҙәк көйгәндә

❖ Ашҡаҙандың әселеге юғары булыу һөҙөмтәһендә үҙәк көйһә, даими рәүештә бөтнөклө (мята) сәй эсегеҙ.

### Пародонтоз

❖ 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкә сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә һәм ауыҙ ҡыуыушлығын сайҡарға. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Башҡортостан XIX быуатта дини үҙәк булараҡ танылa. Башҡорт ерендәге мәсет-мәҙрәсәләрҙең, Ислам буйынса белгестәрҙең, әүлиәләрҙең күп булыуы Урта Азия, Кавказ мосолмандарын үҙенә йәлеп итә.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



## БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

### Йософ тарихы

Йософты үлтергәс, был гонаһтарына үкенеп, Алланың ярлыҡауын алырға уйлайҙар. Ләкин араларынан Робил исемлеһе, оло гонаһ булаcаҡ тип, Йософты үлтермәскә, ә берәй үткенсе табып алыр әле, тип тәрән ҡоҙоҡҡа ырғытырға кәрәк, тигән фекер әйтә. Улар атаһынан, беҙҙең менән күңел асһын, тип, Йософты үҙҙәре менән ебәреүен һорай. Ә ысынында уйҙары ниҙән ғибәрәт булыуын бер Алла ғына белә. Яҡуп: "Минең өсөн Йософ менән бер генә сәғәткә айырылышыу ҙа ауыр. Үҙегеҙ менән алып китһәгеҙ, бик хәсрәтләнермен инде, уға иғтибарһыҙ булһағыҙ, бүре ашап ҡуйыр, тип ҡурҡам", тигәс, тегеләр: "Ант итеп әйтәбеҙ, янында күмәк ағалары була тороп та уны бүре ашаһа, беҙгә оят һәм хурлыҡ буласаҡ бит. Әгәр һин ҡурҡҡан нәмә була ҡалһа, беҙ һаҡларға тейеш булған бөтә нәмәнән дә мәхрүм ителәсәкбеҙ", тигән.

### Йософто ҡотҡарыу

Ағайҙары Йософто алып, юлға сыға һәм атай йортонан алыҫлашыу менән, уны тәрән ҡоҙоҡҡа ырғыталар. Ҡоҙоҡҡа ташлар алдынан систереп алған күлдәген ҡанға буяйҙар ҙа, ҡайтып китәләр.

Кисләтеп өйгә ҡайтҡас: "Эй, атай! Беҙ Йософто әйберҙәребеҙгә ҡуҙ-колаҡ булырға ҡалдырып, йүгереүҙә уҙышҡайныҡ. Уйынға мауығыуыбыҙ арҡаһында уны бүре ашап киткәнен күрмәгәнбеҙ. Беҙ дөрөҫтө һөйләһәк тә ышанмайһың", - тип илағандар. Ләкин аталары Йософтоң үлемендә уларҙы ғәйепләгәндә, бер ни өндәшмәгәндәр. Шунан аталарына Йософто бүре ашауына ышандырыр өсөн уның ҡанлы күлдәген күрһәткәндәр. Ләкин алдаҡсы һәр саҡ фаш ителә. Былар ҙа күлдәкте йыртҡыларға оноҡҡан. Атай кеше барыбер уларға ышанмай: "Күпме генә раҫламағыҙ, Йософто бүре ашамаған. Һеҙ мәкерле уй ҡороп, уны ғәмәлгә ашырғанһығыҙ. Мине тәрән ҡайғыға һалыуығыҙҙы еңеп сығыу өсөн бөгөндән башлап түҙемлек кәрәк. Минең өсөн хәҙер түҙемлектән дә матур тойғо юҡ һәм һеҙҙең ялғанлауығыҙға ҡаршы торор көс бирһен өсөн көнө-төнө Аллаға табынасаҡмын", - тигән.

Ә Йософ ҡоҙоҡҡа ырғытылғас, Аллаһы Тәғәлә уға тәрән ҡоҙоҡтан сығыу юлы барлығын белдереп: "Берәй ваҡыт һин ҙур урын биләгән абруйлы кеше булырһың. Ағайҙарың һинән ҡурҡасаҡ һәм ярҙамыңа, яҡлауыңа мохтаж буласаҡ. Быны шул сағында һинең менән ни ҡылыуҙарын уларҙың иҫтәренә төшөр", - ти. Алла: "...Беҙ Йософҡа күңел тыныслығын бирҙек һәм Аллаға ышанысын нығыттыҡ", - ти.

Бер мәл ҡоҙоҡ янында Сүриәнән Мысырға китеп барыусы каруан туҡтай. Улар бер юлсыны һыу алырға ебәрә һәм Йософ бының күнәгенә йәбешеп өҫкә сыға. Һыу алыусы юлдаштарына был үсмерҙе ҡоҙоҡ янындағы кешеләрҙән һатып алдым, тип алдай. Йософ менән ни булыр, тип ҡоҙоҡ янына килгән ағалары уның кемлеген юлсыларға әйтмәй һәм Йософ үҙе лә үлтереп ҡуйырҙар, тип, уларҙың бер туған ағай булыуҙарын белгертмәй.

Уны өйөнә алып ҡайтыусы бик бай һәм абруйлы мысырлы: "Бәлки, улыбыҙ итеп үҫтерербеҙ", - тип, ҡатынына Йософҡа ҡарата яҡшы мөғәмәлә итергә ҡуша. Быңдай яҡшы мөнәсәбәттәрҙең барыһы ла Аллаһы Тәғәләнең Йософҡа ҡарата миһырбанлы һәм мәрхәмәтле булыуынан килә. Ни өсөн тигәндә, Алла бер ғәйепһеҙ Йософтоң был донъяның бөтөн рәхәтлектәрен күреп йәшәүен теләй.

(Дауамы бар).

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# ЗӘЙНУЛЛА ИШАН МИРАҪЫ - БӨТМӘҪ ХАЗИНА

**Үткән аҙнала арҙаҡлы дин әһеле, йәмәғәт эшмәкәре Зәйнулла Рәсүлевтең 185 йыллығына арналған Халыҡ-ара фәнни конференция үтте. "Рәсәйҙә традицион ислам һәм арҙаҡлы башҡорт ғалим-тюркологы, мосолман донъяһы мәғрифәтсеһе шәйех Зәйнулла Рәсүлев" тип аталған сараның беренсе көнө баш ҡалабыҙҙа ойошторолһа, икенсе һәм өсөнсө көндәре Учалы, Троицк ҡалаларында уҙғарылды. Конференцияла ҡатнашыу өсөн Дағстан, Польша, Үзбәкстан, Ҡаҙан, Санкт-Петербург төбәктәренән ғалимдар, дин әһелдәре йыйылғайны.**

**Башҡорт халҡының бөйөк шәхесе Зәйнулла Рәсүлевты бөгөн бөтөн төрки донъяһы иҫкә ала, баһалай, тиһәң дә, арттырыу булмаҫ. Уны беҙ, башҡорттар ғына түгел, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, татар, ноғай, ҡараҡалпаҡ, чечен, үзбәк һәм башҡа халыҡтар ҙа ололап, хөрмәтләп, үҙҙәренең дини остазы итеп хәтерләй, яҙа. Конференцияла ҡатнашыусыларҙың фекерҙәре лә ошо хаҡта булды.**



***Ирина ПОПОВА, Рәсәй Фәндәр академияһының Көнсығыш ҡулъяҙмалары институты директоры, тарих фәндәре докторы:*** Халыҡтар араһында шундай вәкилдәр була, улар ергә ниндәйҙер бөйөк миссия менән килә һәм шул мисияһын үтәү барышында ул үҙ милләтенең генә шәхесе булыуҙан үтеп, ҙур масса, ҙур халыҡтар вәкиленә әүерелә. Һеҙҙең шәйех Зәйнулла Рәсүлев та шундай һайланма кешеләрҙең береһе ул. Мин һеҙҙең әлеге ваҡытта ҡырҡыу милли мәсьәләләр менән янған, һәр улығыҙҙы һаҡ ҡыҙығыҙҙы ҡармап тоторға тырышҡан мәлегеҙҙә ошондай шәхесегеҙҙе, әлбиттә, үҙегеҙҙеке генә итеп күрһәтергә теләгәнегеҙҙе лә аңлайым. Әммә... ул инде һеҙҙеке генә була алмай. Ул төрки халыҡтарҙыҡы ғына ла түгел, ул мосолман донъяһыныҡы.

Билдәле булыуынса, шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың уҡыусылары бик күп була. 1870 йылда, беренсе йыл ғына шәйех булыуына ҡарамаҫтан, Зәйнулла ишанға белем алырға 7 мең уҡыусы килә, уларҙың күбеһе Урал аръяғы башҡорттары була. Зәйнулла Рәсүлевтың үҙен Ҡотоп Заман да (полюс времени) тигәндәр, ә суфыйсылыҡ юлында Ҡотоп Заман, Ҡотоп Йыһан (полюс вселенной) иң юғары дәрәжәләр һаналған. Был бөйөк шәхес мосолман донъяһыныҡы тиһәм дә, һеҙ, башҡорттар, уның тап һеҙҙең милләттән һәм һеҙҙең ерлектән үҫеп сыҡҡан кеше булыуы менән хаҡлы рәүештә ғорурлана алаһығыҙ...

***Шамил ШИХАЛИЕВ, Рәсәй Фәндәр академияһы Дағстан фәнни үҙәгенең Тарих, археология һәм этнография институты хеҙмәткәре, тарих фәндәре кандидаты:*** Шәйех Зәйнулла Рәсүлев Рәсәйҙең мосолман донъяһы тарихы һәм мәҙәниәтендә шаҡтай ҙур эҙ ҡалдырған шәхес. Замандаштары уны Урал - Волга буйы халыҡтарының ғына түгел, Ҡаҙағстан, Урта Азия, Төньяҡ Кавказ мосолмандарының да "рухи короле" тип атап йөрөткән. Быларҙы үткән быуат ғалимдарының башҡорт ишандары тураһында яҙған хеҙмәттәре лә дәлилләй. Башҡортостан XIX быуатта дини үҙәк булараҡ танылa. Башҡорт ерендәге мәсет-мәҙрәсәләрҙең, Ислам буйынса белгестәрҙең, йәғни дини ғилемле инсандарҙың, әүлиәләрҙең күп булыуы Урта Азия, Кавказ мосолмандарын үҙенә йәлеп итә. Бында һәр яҡтан уҡырға килеүселәр һаны арта. Шуға ла: "Өфө - суфыйҙарҙың баш ҡалаһы", - тип тә әйткәндәр.

Билдәле дин әһеленең күп кенә тау халыҡтары вәкилдәренең дә уҡытыусыһы булыуы билдәле. Мәҫәлән, Рәсәйҙә таралған Нәҡшбәндиә-Хәлидиә тәриҡәтендә булыусы шәйех Шамил Ичкерия Дағстанда милли азатлыҡ өсөн көрәшкән, Төркиәлә курдтар хәрәкәтен етәкләгән. Зәйнулла Рәсүлев Нәҡшбәндиәгә 1876 йылда шәйех Абдул хаким бән Ҡорбанғәли Сарҙаҡлы етәкселегендә инә. Ун йылдан һуң төрөк шәйехе Әхмәт Зыяитдин Кумушханауи ярҙамында Хәлидиә йүнәлешенә лә инеп китә. Әммә, белеүебеҙсә, Зәйнулла Рәсүлев ҡулға ҡорал алыу яғында булмай. Көс ҡулланыу менән бер мәсьәләне лә хәл итеп булмаясағын аңлай. Шуға ла халыҡты əхлаҡи нигеҙҙәргә, мәғрифәткә таянырға өйрәтә.

Беҙҙең халыҡта Зәйнулла Рәсүлевтың Ислам динен изгелек, аң һәм белем тәғлимәте итеп өйрәтеүе, шул йүнәлештә аманаттар ҡалдырыуы юғары баһалана. Дағстанда дин әһеле, мәғрифәтсе һәм реформатор шәйех Зәйнулла Рәсүлев тураһында беләләр һәм уның башҡорт булыуы хаҡында ла хәбәрҙарбыҙ. Республикабыҙҙың дин әһелдәре һәм алдынғы йәмәғәтселеге бөйөк шәйех ҡалдырған рухи һәм ғилми мираҫты уның юлын дауам итеүсе, Дағстандың күренекле дин әһеле Сәйфулла ҡаҙый Башларов ярҙамында һаҡлап ҡала. Дағстан Республикаһының баш ҡалаһы Махачкалала шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлев исемендәге мәсет бар.

***Илшат НАСИРОВ, шәрҡиәтсе ғалим, философия фәндәре докторы:*** Суфый шәйехе Мөхәмәт Әмин әл Курдиҙың "Мәңгелек һәләттәр китабы"нда суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тәриҡәте тарихы, уның теорияһы һәм ғәмәлдәге то-

рошо бәйән ителә. Китапҡа өҫтәмә материал итеп Хәлидиә-Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең Волга-Урал төбәгендәге һуңғы "Бөйөк шәйехе" Зәйнулла Рәсүлевтың "Әл - фауаиду әл - мухимма ли - муридина Наҡшбандийа" ("Нәҡшбәндиә туғанлығы мөриттәре аңларға тейешле булған илаһи хәҡиҡәттәр") тигән хеҙмәте килтерелә. Был юҡҡа ғына түгел. Сөнки Зәйнулла Рәсүлев нигеҙ һалған Троицк ҡалаһындағы суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тәриҡәте буйынса эшләгән мәҙрәсә үҙенең юғары кимәлдә булыуы менән айырылып тора. Ислам донъяһын өйрәнеүсе француз ғалимы Александр Бенигсен "Бөтөн мосолман донъяһының академик уҡыу йорттары араһында ул саҡтағы Троицк ҡалаһындағы "Рәсүлиә" мәҙрәсәһе бирелгән белемдең сифаты буйынса иң яҡшыһы һанала", тип яҙа. Билдәле шәрҡиәтсе В.В. Бартольд башҡорт шәйехе Зәйнулла Рәсүлев вафат булғандан һуң "үҙ халҡының рухи батшаһы үлде" ("Ваҡыт", Ырымбур. 1917 йыл, февраль-март) тип яҙып сыға.

Атаһы менән һәр саҡ Зәйнулла Рәсүлев янына килеп йөрөүсе Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"ендә бөйөк ишан хаҡында шундай һүҙҙәр әйтә: "Әгәр ҙә юғары хөрмәткә эйә булыусы шәйехтең (Зәйнулла Рәсүлевтың - И.Н.) беҙгә шундай иғтибары булмаһа, кем белә, мин дә ун биш йәшемдә, тиҫтерҙәрем кеүек, бай сауҙагәрҙәрҙә ябай һатыусы ғына булып эшләр инем". Башҡорттарҙың үҙаллылыҡ өсөн көрәшкә күтәрелеү зарурлығы идеяһын йәш Зәки суфый шәйехе, башҡорт тарихсыһы Морат Рәмзиҙән дә ала. Зәйнулла Рәсүлев, Морат Рәмзи кеүек батша властарына баш эймәҫ башҡорт суфый шәйехтәре Рәсәй империяһы шарттарында ябай башҡорттарҙы эске рухи үҙаллылыҡ өсөн көрәшкә туплай алған. Был тупланыу башҡорт халҡына Рәсәйҙәге 1917 йылғы инҡилап һәм граждандар һуғышы йылдарында милли үҙаңы юғары булған шәхестәрҙе алғы һыҙыҡҡа сығарып, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Башкурдистан Республикаһы һәм милли армия төҙөргә мөмкинлек биргән.

***Фәнирә ҒАЙСИНА, филология фәндәре кандидаты:*** Зәйнулла Рәсүлев беҙҙең халыҡтың әүлиәһе. Башҡорт халҡы араһында әүлиәләрҙең элек-электән күп булыуы билдәле. Быны һәр төбәктә, күп ауылдарҙа булған әүлиә ҡәберҙәре, тауҙары, таштары, шишмәләре дәлилләй. Борон халыҡ араһында әүлиәләрҙе бер урынға күпләп ерләү ғәҙәте лә булған. Мәҫәлән, Ишембай районында урынлашҡан Таратауҙа 48 әүлиә, Күгәрсен районы Төпсән ауылында 7 әүлиә ерләнгәне билдәле . Тәрлә сығанаҡтарҙан күренеүенсә, 1917 йылғы революцияға тиклем башҡорттар араһында дин буйынса Бохара ҡалаһында, Мысырҙа, Төркиәлә һәм башҡа сит илдәрҙә уҡып ҡайтыусылар күп булған. Бихисап башҡорт шәйех, ишандарының исемдәре билдәле була. Мәҫәлән: Асҡын районы Әмир ауылынан Әҡсән Әсләм улы Насиров шәйех-кирам дәрәжәһендә булған; Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Мораҙым ишан Сәйетмәмбәтов; Баймаҡ р-ны Муллаҡай ауылынан Ғабдулла Сәиди ишан; Байым ауылынан Байым ишан Денебәков; Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Әбйәлил ишан; Көйөргәҙе районы Илкәнәй ауылынан Ғиләжетдин ишан; Көйөргәҙе районы Мәмбәтҡол ауылынан Мөхәмәтшәриф улы Мөхәмәтсабит ишан, Мөхәмәтсабит улы Мөхәмәтсабир ишан, Мөхәмәтсабир улы Мөхәмәтсалих ишан Сабиров; Мәсетле районы Әлегәҙ ауылынан Ғабдулла ишан; Ләмәҙтамаҡ ауылынан Сисәнбай Хисмәтуллин ишан; Мәләүез районы Түләк ауылынан Түләкәй ишан; Арыҫлан ауылынан Сәхиулла ишан Толонғужа улы Мусин, уның бер туған ҡустыһы Сәғиҙулла ишан, уның улы Ғарифулла ишан Бураҡанов; Үрге Таш ауылынан Фәйзулла ишан Сәйетап улы Айтуғанов; Шишмә районы Сәфәр ауылынан Сәит Йәғәфәр ишан; Хәйбулла районы Вәлид ауылынан Ғатаулла ишан; Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылынан Ғәлиәкбәр ишан; Әлшәй районы Япар ауылынан Ишан хәҙрәт (исеме әлегә билдәһеҙ); Яңауыл районы Туртыҡ ауылынан Мөким ишан; Кисәкҡайын ауылынан шәйех-кирам Ғәбдрәхим; Һарытау өлкәһе Перелюб районы Мухин ауылынан Яхъя ишан; Һамар өлкәһе Оло Чернигов районы Диңгеҙбай ауылынан Ишан хәҙрәт (исеме онотолған); Ҡурған өлкәһе Сафакүл районы Ҡаракүл ауылынан Ишмөхәмәт ишан; Силәбе өлкәһе Троицк ҡалаһында Зәйнулла ишан Рәсүлев ерләнгән (сығышы менән хәҙерге Учалы районы Шәрип ауылынан) һ.б. Килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, бер генә ғиләнән өсәр ишан булғанлығы иғтибарға лайыҡ. Шәйех, ишан дәрәжәһендә булған кешенең мөрид алып тәрбиәләү хоҡуғы булғанлығы билдәле. Әммә ундай дәрәжәгә бик һирәк кенә кешеләр етә, өлгәшә алған. Өҫтәге исемлектән сығып ҡына ла беҙ элекке Башҡортостан ерлегендә суфыйсылыҡтың ни тиклем киң таралғанлығы тураһында һүҙ йөрөтә алабыҙ.

***Зөлфиә ХАННАНОВА, шағирә:*** Гәзиз еребеҙҙе әүлиәләр рухы тәрлә афәттәрҙән, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап, ҡурсалап тора, тигәнде ишеткәнем бар. Күрәһең, күп йылдар элек аяуһыҙ эҙәрлекләүҙәргә дусар булған халҡыбыҙҙың аҫыл улдарының изге рухтары әле булһа ерҙәге үҙ тәғәйенләнешенә тоғро ҡала торғандыр. Шуға ла бөтә мосолман илдәрендә бөгөн дә оло ихтирам менән телгә алынған башҡорт шәйехе Ҡотоп Заман Зәйнулла Рәсүлевтың исеме үҙ илен, ерен, халҡын һөйгән һәр башҡорт күңелендә милләтебеҙҙең рухи етәксеһе булараҡ күҙалланыуы һис тә ғәжәп түгел. Заманында әлләә күпме һөргөндәр үткән, төрмәләргә бикләнгән алдынғы ҡарашлы дин әһеленең яҙмышындағы фажиғәле биттәр тураһында күп уйланғаным булды. Белорет районының Шығай ауылында йәшәүсе Зәйнулла ишандың бүләсәре 80 йәшлек Сәүҙә Әниева (Иҡсанова) инәй менән осрашыуымдың маҡсаты ла билдәһеҙ һорауҙарға яуап табыу ине. "Атайымдың әсәһе Кәримә өләсәйем Зәйнулла ишандың ҡыҙы була. Ул бик иртә донъя ҡуя. Атайым Шәмсетдин өс йәшлек кенә сағында йәш ярымлыҡ Ғәләүетдин ҡустыһы менән етем ҡала. Кәримә өләсәйем үлгәс, Йософ олатайым бик уҫал татар ҡатынына өйләнә. Зәйнулла олатайым ейәндәрен йәлләп, уларҙы үҙенең тәрбиәһенә ала. Белем биреп, буй еткергәс, Шығай ауылына яңы мәҙрәсә һалдыртып, 1903 йылда атайымды шунда уҡытырға ебәрә. Бәләкәйҙән ҡалала үҫкәс, атайым тәүҙә ауыл ерен берҙә генә лә үҙһенмәй ыҙалай. Олатаһына Троицкиға ҡайтырға рөхсәт һорап, хат та яҙып ҡарай. Әммә Зәйнулла ишан: "Һин ошо ерҙә йәшәргә тейешһең!" - тип, ҡырт киҫә. Һуңынан күпме эҙәрлекләүҙәргә дусар булһа ла, олатаһы ҡушмаған, атайым Шығайҙан бер ҡайҙа ла китмәгән", - тип бәйән итте ғаилә тарихы тураһында Сәүҙә Шәмсетдин ҡыҙы.

***Салауат ХӨСӘЙЕНОВ, тарих фәндәре кандидаты:*** Заманында Зәйнулла Рәсүли ән-Нәҡшбәнди ишандың исеме Иҙел-Урал, Себер һәм Ҡаҙағстан яҡтарында киң билдәле булған. Уға рухи юлбашсы кеүек ҡарағандар, уның менән осрашырға теләгәндәр. Уның Троицкиҙағы мәҙрәсәһе һәм йорто мосафирҙарҙан өҙөлмәгән. Шундай хөрмәт яулаған инсан тураһында замандаштары тәрлә мәғлүмәттәр, хәтирәләр һәм шиғри яҙмалар яҙып ҡалдырған. Әммә әлегәсә уның биографияһына һәм эшмәкәрлегенә бәйле күп кенә асыҡланмаған аҡ таптар тороп ҡала бирә. Замандаштарының уға арнап сығарған әҫәрҙәре лә тулыһынса билдәле түгел. Әле лә был шәхескә бәйле быға билдәһеҙ яҙма ҡомартҡылар осрай. Мәҫәлән, ошо йылдың февраль айында Өфөлә йәшәүсе Бикҡужина Хафиза бер төргәк ғәрәп графикаһындағы иҫке баҫма китаптар һәм ҡулъяҙмалар килтерҙе. Шуларҙың араһында бер китап иғтибарҙы йәлеп итә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был китап тулы түгел. Унда ҡыҙыҡ ҡына шиғыр-мөнәжәт бар. Был шиғыр Зәйнулла ишанға арналған булырға тейеш. Уның ғына йөҙ саҡрым ара үтеп Мөхәммәт тигән хажиға ҡунаҡҡа килеүе мөмкин. Ни өсөн быңдай фекергә килдәбеҙ һуң? Шиғырҙа был осрашыуға бөрйәндәр ҙә килә, тиелгән. Яҡташы менән улар үҙ яҡтарында ла осраша алырҙар ине. Тағы ла бер дәлил: үрҙә аталған китап та, был шиғыр ҙа Әбйәлил районынан алып киленгән. Улар араһында Шафиҡ Әминев Тамъяниҙың "Урал", "Үҙем Шафиҡ...." исемле шиғырҙары ла бар. Был "Мөнәжәт" тә шул уҡ ҡағыҙҙа һәм шул уҡ почерк менән яҙылған. Шуның өсөн был шиғырҙың да уның авторлығында булыуы мөмкин. Шиғырҙағы Мөхәммәт хажи Асҡар (Әбйәлил) ауылында мулла булып тора. Зәйнулланың икенсе ҡатыны Мәфтуханан тыуған ҡыҙы Сәлиха атаһы менән һөргөндән һуң тыуған яҡҡа ҡайтҡас, башта атаһының Ғәбделхәбир исемле шәкертенә кейәүгә сыға. Ул үлгәндән һуң ошо Мөхәммәт хажи бине хорунжий Ғәҙел мырҙа Яҡшымбәтов Сәлиханы ала. Сәлиханан алты бала тыуа (Һуңынан уның Нәфисә исемле ҡыҙы Әхмәтзәки Вәлидигә кейәүгә сыға). Шулай итеп, шиғырҙа Зәйнулла ишандың ҡыҙы Нәфисә менән кейәүе Мөхәммәт хажиға ҡунаҡҡа барыуы тураһында һүҙ барыуы мөмкин.

Беҙҙе олуғ шәхесебеҙ хаҡындағы һәр мәғлүмәт, һәр яңы яҙма ҡыҙыҡһындыра. Күреүегеҙсә, бөгөн уны дөйөм мосолман донъяһы үҙенеке итеп иҫәпләй һәм беҙ был тәңгәлдә айырыуса уяу булырға бурыслы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ-ара конференция башҡорт улы бөйөк шәйехтең шәхесен һәм хеҙмәттәрен донъя кимәлендә таныу һәм хөрмәтләүҙең бер өлгөһө булып торҙо. Зәйнулла ишан Рәсүлевтың иң ҙур ҡаҙаныштары - XIV быуат аҙағында һәм XX быуат башында ватандаштары һәм тотош мосолман донъяһы өсөн ҙур йөғонто яһауында. Сарала ҡатнашыусы ғалимдар һәм дин әһелдәре әйтеүенсә, уның мираҫы - күңелен үҫтерергә, ҡамиллашырға теләгән кешеләр өсөн бөтмәҫ хазина. Уны өйрәнәһе лә өйрәнәһе.**

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Хәмит АЛҒАР

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

З. Рәсүлев урыҫ сәйәсәте менән көрәшендә бары тик дини, мәғрифәти һәм мәҙәни ысулдар ҡулланған, тип уйларға кәрәк, уның башҡаса сәйәси эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, ул татарҙарҙың һәм Рәсәй империяһының башҡа мосолмандарының үҙҙәренең хәлен яҡшыртыу маҡсатында урыҫ либераль буржуазияһы менән союздаш булырға ынтылыуын хуплай. Мәҫәлән, ул Түбәнге Новгородта 1906 йылдың 16 - 20 авгусында уҙған өсөнсө Бөтә Рәсәй конгресы адресына изге теләктәр менән телеграмма ебәрә. Ошо конгреста сәйәси фирҡә итеп үҙгәртелгән Мосолмандар союзы ("Иттифак аль-муслимин") лидеры Ғәлимйән Баруди Зәйнулла шәйехтең күренекле варисы була. 1908 йылдан башлап, мосолмандар талап иткәндә урыҫтарҙың үтергә теләмәүе асыҡланыу менән, Мосолмандар союзы үҙенең уртасыл сәйәсәтенән баш тартып, тактикаһында радикаль элементтарҙы көсәйтә. Әммә Зәйнулла ишан былар менән бәйләнештә булмай.

Дөйөм алғанда, Зәйнулла ишандың эйәрсәндәре бик күп була, һәм улар араһынан ҡайһы бер күренекле уҡыусы-мөриттәренең исемдәре билдәле. Үрҙә телгә алынған Ғәлимйән Баруди, сәйәси әүҙемлегенән башҡа, Ҡазан ҡалаһының "Мөхәммәдиә" мәҙрәсәһе директоры булараҡ та билдәле. Рәсәй империяһында иң эре мосолман уҡыу йорттарының береһе, тип иҫәпләнгән ошо дини институтта яңы педагогик уҡытыу ысулы индерелгән, 300-ҙән 400-гә тиклем шәкерт белем алған. 1917 йылдың майында Ғ. Баруди Өфө ҡалаһы мөфтөйө вазифаһына тәғәйенләнә, икенсе йылына ошо ҡалала ойошторолған Мосолман Милли Йыйылышының дин департаменты рәйесе булып китә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Ырымбур мөфтөйө булғандан һуң, 1921 йылда Мәскәүҙә вафат була. Ул Зәйнулла шәйехтең ябай мөрите генә түгел, ә уның Хәлидиә-Нәҡшбәндиә туғанлығы буйынса әүҙем һәм инициативалы варисы ла була.

Зәйнулла ишандың ҙур баһаға лайыҡ варисгарының береһе Сабирйән Хәсәни күп йылдар дауамында Өфө ҡалаһы мөфтөйө була. Дини фәндәрҙе юғары кимәлдә уҡыта алыуы менән ул бөтә Рәсәй мосолмандарының оло ихтирамын яулай. 1910 йылда Исмәғил бей Гаспринскийға (Гаспралы) Ислам диненә ҡусергә теләк белдергән ниндәйҙер бер Австрия баронессаһы һорау менән мөрәжәғәт итә. Баронесса мосолман ҡатынҡыҙҙарына йөҙөн һәм һын-һыпатын ҡаплау өсөн тәғәйенләнгән бөркәнсек ябынып йөрөүҙе мотлаҡтыр, тип уйлап, үҙенең икеләнеүе тураһында яҙа. И. Гаспринский ошо һорауға яуап яҙыуҙы Сабирйән Хәсәнигә йөкмәтә. Ул, ҡатын-ҡыҙҙың һын-һыпатын тулыһынса ҡаплап тороусы һәм ошо арҡала уға бер ниндәй ҙә ижтимағи эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү мөмкинлеген бирмәүсе бөркәнсек ябынып йөрөүҙең шариғәти (Ислам ҡанундарында) нигеҙҙәре булмауын белдереп, хатта бөркәнсекте Рәсәй мосолман төбәктәренең күбеһендә белмәүҙәре тураһында яҙа. Сабирйән Хәсәни шулай уҡ Хиджазда тимер юлы төҙөү өсөн аҡса йыйыу ойоштора. Сабирйән Хәсәниҙең үлгән йылы билдәһеҙ.

**(Дауамы бар).**

✓ *Мәктәпте тамамлағандан һуң электромеханик һөнәрен үҙләштергәйне. Аҙағыраҡ трактористлыҡҡа уҡып сыҡты. Нефть быраулаусы булып та йөрөнө, ташсы ла, умартасы ла ине. Бына ҡасан кәрәкте быуын ныҡлығы.*



ҺАБАҠТАР



# МЕНДӘР МАМЫҒЫ ҺӘМ ҒӘЙБӘТ

**Зәйнулла ишан Рәсүлев өҫтөнән бер туктауһыҙ шикәйәт яҙа бер әҙәм. Ишанды төрмәгә ултырталар. Күпмелер ваҡыт үткәс, ялыусы әҙәм ауырый башлай. Ниндәй генә табиптарға күрһәтеп ҡараһалар ҙа, уның сиренә дауа табылмай. "Шикәйәттәрем өсөн бирелгән Хоҙай язаһылыр был" тигән уй башына килә ялыусының һәм ул Зәйнулла ишандан ғәфү үтенергә була.**

- Мин һине ғәфү итәм, - ти Зәйнулла ишан. - Тик бер шартым бар...

- Берәү генәме? - тип ҡыуанып китә ялыусы әҙәм.

- Берәү генә. Өйөндәге иң ҙур мендәреңде урамға алып сыҡ та, шуның мамығын урам буйлап һибеп таратып сыҡ...

Ялыусы Зәйнулла ишан әйткәнде тиҙ арала үтәй һалып, тағы уның янына килә.

- Бик тиҙ башҡарғанһың мин әйткәнде, - ти Зәйнулла ишан. - Ә хәҙер шундай уҡ еңеллек менән һибеп сыҡҡан мамығыңды йыйып ал.

- Уны нисек йыйып бөтөрмәк кәрәк! - тип ҡысҡырып уҡ ебәрә ялыусы.

- Ялған һүҙҙе таратыуы ла еңел, - ти Зәйнулла ишан. - Ә бына уның күңелгә, яҙмышҡа уйылған эҙемтәләрен юйыуы бик ауыр...

Шуның кеүек, телең менән һөйләп, уйлағаныңды һәм фекерләгәнеңде башҡаларға аңлата алыуың - иң ҙур ниғмәттәрҙең береһе. Тел - ул бысаҡ миҫалындағы ҡорал кеүек. Бысаҡ менән яҡшы эштәр ҙә, насар енәйәти эштәр ҙә башҡарырға мөмкин. Тән яраһы төҙәлһә лә, тел яраһы төҙәлмәй, тиҙәр халыҡта. Бигерәк тә беҙҙең заманда һаҡһыҙ эш итеүселәр күбәйҙе тел менән. Ҡайһы берәүҙәр, динһеҙлектәнме, тәрбиәһеҙлектәнме, башҡаларҙың кәмселектәрен эҙләп, күреп, уны хатта арттырыбыраҡ һөйләргә тартынмай, шундай ғәйбәт таратыуынан ләззәт таба хатта.

Кешегә ауыр һүҙ әйтеп рәнйетеү өсөн артыҡ көс түгеү кәрәкмәй. Әммә рәнйетелгән кешенән ғәфү үтенеү, күпме генә тырышыуға ҡарамаҫтан, һәҙәмтә бирмәүе мөмкин. Ғәйбәт һөйләү йәки кешеләрҙең етешһеҙлектәрен һөйләп йөрөү суска ите ашау, араҡы эсеүҙән дә яманыраҡ. Аллаһы Тәғәләнең изге китабында ғәйбәт һөйләү һәм кешенең кәмселектәрен һөйләп ләззәтләнеү үлгән кешенең итен ашау менән сағыштырыла.

Көндәрҙән бер көндә Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) вәғәз һөйләгәндә етди тауыш менән былай ти: "Әй, теле менән генә иман килтереп, күңелдәреңдә иманы булмағандар! Мосолмандарға зыян килтермәгеҙ, уларҙың кәмселектәрен эҙләмәгеҙ. Берәйһе мосолман ҡәрҙәшенең кәмселеген эҙләп йөрөһә, Аллаһ та ул бәндәнең кәмселеген эҙләр һәм ул ҡайҙа ғына ҡасһа ла, уны табып, оятҡа ҡалдырыр".

Ғәйбәт- иң оло ғонаһтарҙан һанала. Ғәйбәт һөйләгәнгә ҡарағанда, өндәшмәй тороуың хәйерлерәк. Мендәр мамығы кеүек, ялған һүҙҙәрҙе унда-бында туҙҙырма. Таратыуы еңел булһа ла, нисек кенә теләһәң дә, йыйып алыуы еңел булмаҫ.

**Бибинур ҒИЗЗӘТУЛЛИНА** әҙерләнә.

**Һуңғы өс тиҫтә йыл эсендә барған бар кешелеккә ҡағылышлы ваҡиғалар (уларҙың масштабын көҙәллатыу өсөн белгестәр "геополитик характерҙағы ваҡиғалар" тигән һүҙбәйләнеш ҡуллана) айырыуса ер кешеһен иң ауыр һынауҙар алдына ҡуйҙы. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе, эш алымдарын ғына түгел, тотош йәшәү рәүешен үҙгәртергә кәрәк булып сыҡты. 1986 йылдың яҙынан башланған "үҙгәртеп ҡороуҙар"ҙың "осо"на сыҡтыҡ, тип әйтергә кем генә баҙнат итер икән? Шулай ҙа ауыл хужалығы аҡрын-аҡрын булһа ла ыңғай һөҙөмтәләргә ирешкән һымаҡ. Әммә, тәжрибә күрһәтеүенсә, тотороҡло үҫеш эш кешеһенең хөкүмәт тарафынан гарантиялы ҡурсалауҙа булыуы менән бәйле.**

# АУЫЛ ЭШҠЫУАРЫ

## ул аҫабалыҡ

### Ауырлыҡҡа ҡарамай...

Рәсәйҙә ауыл хужалығы торошон етди өйрәнеүселәр шундай һығымтаға килә: хөкүмәт фермерҙарҙы үҙ яҡлауына алғанда, улар етештергән тауарға аныҡ заказ биреүҙе, хаҡ билдәләүҙе ныҡлы күҙәтеүҙә тотҡанда ғына был тармаҡ уңышлы эшләйәсәк. Ғәмәлдә нисек һуң? Ауда уйланыуы - ауылдың киләсәгенә бәйле өмөттәремде ныҒытты.

### Эйе, өмөттө һүндереү ярамай...

Шәкәре тәмле лә бит... Һай, был сөгөлдөр утауҙары! Сей елкәгә тейә... Тейеү генәме!. Нөгөштә һыу инеп, ҡомда ғына ҡыҙынып ят ине. Йәйҙе зарығып көтөп алаһың, ә ҡасан күреп ҡалаһың? Көҙән иһә, шул лындан килгәнсә яҡынайтырға тырышыуҙалыр бар мәғәнә, кешесә йәшәү асылы!..

Шундай уйҙарға тарый ҙа мәсьәләнең елеген ҡапшарға ынтыла. Бөгөнгө проблемаларҙың тамырҙарын юллап, сал тарихты тарарға тотона.

Ирекле, үҙаллы йәшәйем тип, күпме яу сапҡан башҡорт! "Аямаған йәнен, түккән ҡанын..." Шуға ла Ғүмәр хәрби хеҙмәттә булһынмы, эш буйынса сит тарафтарҙа йөрөһөнмө - һәр саҡ башын юғары тотоп, үҙ бәҫен белеп һөйләшә. Бер үк мәлдә шуныһын да онотманы: "диңгеҙҙәрҙе ҡыҙартырлыҡ" ҡан түгеүҙәр эҙһеҙ үтә буламы? Ниндәй яуҙа ла иң саялар, иң ҡыйыуҙар, иң намыҫлылар күберәк ҡырыла. Быныһы етмәгән, аҙаҡ, күтәрелештәрҙән һуң, ил азатлығы өсөн алдан йөрөгәндәрҙең балаларына тиклем эҙәрлекләүҙәргә дусар ителгән. "Тамырҙары ҡороһон!" тип ажарланған, ҡәһәтләнгән илбаҫар... Ә ҡуйылған маҡсаттарына ирешә алмау аҡрын-аҡрын булһа ла төңөлөүҙәргә килтерә...

Әммә нисек кенә булмаһын теге өмөттө һүндерергә һис кенә лә ярамай бөгөн. Юҡ, ярамай! Ә бының өсөн эш кешеһенә ышаныс белдеылда эш башларға теләгән кеше, ҡырҡмаһа-ҡырҡ документтар тултырып, банктан юғары процент менән кредит ала. Алыуын да алырһың, ә йыл нисек килер? Ҡоролоҡ булып, бер ни үҫмәһә? Ярай, былары лы ыңғай хәл ителде, ти. Хөкүмәт заказы булмағас, тауарың үтмәй ятһа? Йыш ҡына әсе тир түгеп етештергән тауарын алыпһатарҙар юҡ ҡына хаҡҡа алып китә...

Өҙөүе ҡыйын булған был "дүңгәләк"тән ("порочный круг") сығыу юлын уйланған ауыл эшҡыуары ла, проблеманы хәл итеүҙе ҡайғыртҡан власть әһеле лә ауыл хужалығы тармағында кооперация ойоштороу менән бәйләй. Уны фермерҙар берләшеүе тип кенә аңларға ярамайҙыр. Шул берләшеү нигеҙендә тауарҙы башынан аҙағына тиклем эшкәртеп, туранан-тура ҡулланыусыға тәҡдим итә алырлыҡ кимәлдә булыу, тип күҙалларға кәрәк. Кооперацияның ере, фермалары, техникаһынан тыш, үҙ элеваторы, һөтмай, ит-консерва, икмәк заводтары, хатта үҙ магазины булһа, хөкүмәт ҡурсалауына таяна алһа, алыпһатарҙар, банктар "талауынан" азат буласаҡ. Ысынында иһә, ер кешеһенең хәле әлегә маҡтанырлыҡ түгел. Проблемалар ҙа ваҡыты-ваҡыты менән йырып сыҡҡыһыҙҙай күренә. Бөгөн дә мин ауыл эшҡыуарҙары зарында алыҫ олатайҙарымдың үҙ түрәләренә бәйле "Яуыз кантондарҙы ҡуя икән Рәсәй ҙә генә тигән батшалыҡ" тигән хәтәр дөйөмләштереүендә, XX быуат башында иһә, банктарҙан кредит алып булһа ла, хужалығын ныҒытып ҡарарға тырышҡандан һуң, "бульно чижела" тип һығымта яһауында - был инрәүҙәрҙен бер-береһе менән ныҡ ауаздаш булыуына төшөнгәндәймен... Бер үк мәлдә фермерлыҡ менән шөғөлләнгән ауылдашымдың, хужалығында ологара проблемалар булыуына ҡарамаҫтан, иртәгәгә ышаныслы ҡарауы, милләте хаҡын ыҡ сөгөлдөр: көрәк менән ҡаҙып ал, ҡырғыслап таҙарт, өйөп ҡуй, машинаға тейәп ебәр. Ваҡытында оҙата алһаң әле.

Йылдар үтер... Өс-дүрт йәштән ҡул араһына инә башлаған ауыл балаһы аҙаҡ: "Булдымы ул баласаҡ?" - тип, уфтанһа, ғәжәпме ни. Юҡ, "Салбар ишаратын тарта-тарта, Ҡаҫҡым килде бала сағымдан!" - тип, тикмәгә яҙмағандыр Булат ағай Рафиҡов, үҙәгенә үткәнгә яҙғандыр... Мәктәпкә лә бит бишенсе кластан алты саҡрымдағы Боһорманға йәйәүләп йөрөргә тура килде. Ҡышҡы ыжғыр буран булһынмы, яҙғы көҙгө рашҡымы - иртәнге етенән ҡалмай тораһың да тәпәй туратыңды егәһең...

Шулай ҙа был "яфа"ларҙың икенсе яғы ла булмағанмы ни? Тап ошолай быуын ныҒынған, ҡаршылыҡлы йәшәйештең, өҙлөкһөҙ хеҙмәттең генә тормош нигеҙе, йәшәү сығанағы икәнлеге йән-ҡанға һеңешкән - шулай Кеше булынған...

Үтелгән ғүмер юлына ҡайырылып ҡарай ҙа Ғүмәр (мулла ҡушҡан исеме. "Дәкәмиттә" иһә сабый сағында уҡ вафат булып ҡуйған ағаһы Мөхтәр исемен йөрөтә ул) Зиннур улы Иҫәнов, киләсәккә өмөтләнеп, иртәгә мотлаҡ яҡшыраҡ буласаҡ, тигән икеләнеүһеҙ ышаныс менән йәшәлгән, тип ҡуя. Атай-әсәйҙәрҙең быуыны ла тап шундай инаныс булғанға ғына әҙәм балаһының көсө еткеһеҙ ауырлыҡтарҙы ла күтәрә, усағында утын ләүкетеп, балаларын аяҡҡа баҫтырып, тормошто дауам иттергән, милләтте һаҡлай алған...

Тик бөтәһен дә иртәгәгә ҡалдырып ҡына йәшәү дөрөҫмө икән һуң? Бөгөнгөнөң дә ҡыуаныстары булырға тейештер ул. Ауырлыҡтарға күнеп йәшәү - сараһыҙлыҡтан ғына түгелме? Әллә әҙәм балаһының булмышына һуңғы сиккә еткәндә лә өмөтө ҡалырға тейеш, тиелгәнме? Бәлки, тормошто нисек бар - шулай ҡабул итеп, ҡояшлы иртәгәне күрергә кәрәк. Әҙәм балаһы өмөттәренән төңөлмәһен. Бына минә ышаныс күрһәтмәһәләр, шундай эштәр атҡарып булыр инеме? Рәхмәт - ышаныс күрһәттеләр. Үҙем дә хәҙер кешегә ышанырға тырышам, уларға таянам. Бындай мөнәсәбәт яуаплылыҡ тойғоһо уята. Әлбиттә, ышаныып эш ҡуштың да - онотторң түгел. Әйтелгәндең, ҡушылғандың үтәлешен тикшермәй булмай. Проблемаларҙың күбеһен әҙәм балаһы үҙе тыуҙыра бит. Тимәк, уларҙы үҙе үк хәл дә итә алырға бурыслы. Дөйөм алғанда, яҡшыра бара тормош шулай ҙа, яҡтыра бара тирә-йүн.

### Дилбегә Ғүмәр ҡулында

Зәфәр ағалары ярҙамында Әнүр ҡустыһы фермерлыҡ эшен башлап ебәргәйне. Инде хужалыҡ ныҒынып бара тигәндә вафат булып ҡуйҙы. Дилбегәне Ғүмәр алды. Ни кәрәкһә - шул юҡ! Кәртә-ҡураны ныҒытып алырға уйлаштылар, ә сөй һатып алырлыҡ та аҡса ҡалмаған. Әлдә тутыға башлаған кәкере сөйҙәр яткан икән - ярап ҡалды. Өмәселәрҙе мәтрүшкә сәйе менән һыйланылар...

Тәүәккәллек, ныҡышмалылыҡ күрһәтте Ғүмәр. Ал-ял белмәне, көндө төнгә ялғаны. Кешене генә ҡушып, ҡарап торманы, башлап үҙе тотондо. Нөгөш ҡасабаһында урта мәктәпте тамамлағандан һуң электромеханик һөнәрен үҙләштергәйне. Аҙағыраҡ трактористлыҡҡа уҡып сыҡты. Нефть быраулаусы булып та йөрөнө, ташсы ла, умартасы ла ине. Бына ҡасан кәрәкте быуын ныҡлығы, иртәгәгә бәйле булған, тора-бара көслөрәк дөрләгән өмөт тигәнен: арыуланасаҡ ул донъя. Турайырбыҙ, иншалла! Аяҡтарҙы ергә кирә баҫып торасаҡбыҙ барыбер! Иң мө-

**✓ Йыш ҡына ул үҙен, плацдарм яулап, уны нисек тә булһа төп көстәр килгәнсе һаҡларға тейеш яугирҙай һиҙә Ғүмәр. Аңларға тейеш бит халыҡ: башҡорт үҙ еренең хужаһы булыуы, аҫабалығы менән генә көслө.**



һиме - маҡсаттарыбыҙ изге: шундай данлы-шанлы халҡыбыҙҙың иртәгәһе өсөн ҡулдан-ҡулдан килгәненсә айҡашыр кәрәк. Байлыҡ бер айлыҡ, ә хәтерле халыҡ, ерле халыҡ - мәңгелек. Ер үҙебеҙҙеке бит әле. Шул ергә тешең-тырнағың менән йәбешеп ятыр кәрәк. Юҡ! Тикмәгә тыумаған ул йыр: "Һис бирмәгән башҡорт Уралын!.." Еребеҙ бар икән, беҙ ҙә буласаҡбыҙ! Тик буш ятмаһын тир, ҡан менән һуғарылған гәзиз тупраҡ. Һөрөнтө ерҙәрҙе ташлап ҡуйыу - оло гонаһ түгелме ни? Ана, Нөгөш аръяғындағы урыҫ ауылдары бөтөнләй бушап ҡалды тиерлек. Ә бит ул ерҙәр ҙә заманында беҙҙең ауылдыҡы ине. Нөгөш үҙенең йырҙаһын үҙгәртә килеп кенә тегеләргә ҡалғайны. Закон нигеҙендә шул ерҙәрҙе үҙ ҡарамағына алды хужалыҡ. Ҡырҡ туғыҙ йылға килешеү төҙөлдө...

Электән аралашып йәшәгән, һәр кемдең "знакум"ы йә белеше булған Вишнау (халыҡ телендә. Рәсми исеме - Вишневка) ауылы зыяраты бөтөнләй ташландыҡ хәлдә ҡалыуын күреп, уйланды Ғүмәр. Нилектәндер үҙен гәйепле лә тойған һымаҡ. Кәртәләп ҡуйырға булды. Өмә ойошторҙолар. Эш мәлендә Ғүмәргә кемдер текәлеп-күҙәтеп тик торғандай. Ипле генә тирә-яғына күҙ һала. Эшһеҙ торған бер кем юҡ, һәр береһе ни менәндер мәшғүл. Тағы тотона эшенә, тағы шул уҡ хәл ҡабатлана. Ҡарашты тотоп алыу өсөн "ялт" итеп ҡапыл боролоп ҡараны ла ... ныҡ тертләне. Ҡәбер ташы һүрәтенән тере кешенекеләй ҡараш һиҫкәндерҙе уны. Тере сағында ла күргәне бар ине был апайҙы...

Быныһы бер хәл. Күңел урынына ултырып бөтөр-бөтмәҫтән өмәлә ҡатнашҡан Илдар Ғафаровтың һөйләгәне шаҡ ҡатырҙы: "Кисә йоҡоға ойоп ҡына барғанымда теге апай килде бит. Оҙон аҡ күлдәктә. "Ҡурҡма!" - ти. - Мин һеҙгә рәхмәт әйтергә генә килдем. Бик игелекле эш эшләнегеҙ..." - тине лә аҡрын ғына иреп юҡҡа сыҡты..."

Аҙаҡ Вишнауҙан сыҡҡан берәү зыярат кәртәләгән өсөн Ғүмәргә аҡса тәҡдим итеп йөрөнө. Әйтерһең, шундай эш аҡса өсөн эшләнә.

### Ә шулай ҙа алға бара хужлыҡ

Аҡрынлап ныҡына бара хужалыҡ. Бөгөн уның ҡарамағында 500-ләп һыйыр малы (шул иҫәптән, 167 һауын һыйыр. Һәр береһенән 18-әр литр һөт һауып, көн дә тонна ярым һөт тапшыралар. Литры 14 һум. Тәү ҡарамаҡҡа, арзан һымаҡ та, әммә Ғүмәр бик ҡәнәғәт. Ергәндекеләр килеп ала - мәшәҡәте юҡ), 400-ләп һарыҡ, 100 баш йылҡы. Ике мең гектар самаһы сәсеүлектәре, 700 гектар көтөүлек-сабынлыҡтары бар. Егермеләп кеше эшкә йәлеп ителгән. Ҡыҙыу осорҙа йәнә эшсе ҡулдар өҫтәлә. Техника ла етерлек. Бынабына ун дүрт миллионлыҡ грант алырға торалар...

Әммә барыһы ла ал да гөл, туп-тура таҡыр юлға һалынды, тип әйтерлек түгел шул әле. Ауыл хужалығы тармағы тәбиғәт торошона бәйле шул ни әйтһәң дә. Бер билдәле әҙип ауылдыҡылар менән аралашҡанда, унайын килтереп, өлкән ҡәләмдәше Мөхәммәтша Буранғоловтың әйткәндәрен иҫкә төшөргәйне: "Мы бисатели багоду не делаем, но бортить можем!.." Әңгәмәселәрҙең береһе юғалып ҡалманы: "Ауыл кешеһенә ҡарына-ямғырына ҡарап тормай эшләргә тура килә шул..."

Эйе, эшләргә тура килә, тик тәбиғәткә ҡаршырға ярамай. Уның көйһеҙлеге менән иҫәпләшмәй булмай. Йәнә лә шуныһы: ирмен тигән ир, ҡамғаҡтай, ел ыңғайына тәгәрләмәҫ, ә үҙен ошо ерҙең ныҡлы хужаһы итеп тояҫаҡ. Шул осраҡта ғы-

# ШУНЫ АҢЛАЙ:

## менән көслө

### ҒҮМӘР ИҪӘНОВ:

*Бөгөнгөнөң дә ҡыуаныстары булырға тейештер ул. Ауырлыҡтарға күнеп йәшәү - сараһыҙлыҡтан ғына түгелме? Әллә әҙәм балаһының булмышына һуңғы сиккә еткәндә лә өмөтө ҡалырға тейеш, тиелгәнме? Бәлки, тормошто нисек бар - шулай ҡабул итеп, ҡояшлы иртәгәне ҡулыңдан килгәнсә яҡынайтырға тырышыуҙалыр бар мәғәнә, кешесә йәшәү асылы!..*



на ер елеген имеп йәшәүҙән бигерәк, уның киләсәген хәстәрләйәсәк, уның ейәндәргә ҡаласағы тураһында уйланасаҡ. Ни ҡаласаҡ, нимә ҡалдырасаҡбыҙ килер быуындарға? Саңы борхоп ятҡан, ҡый үләне лә үҫмәгән, ярғыланып ятҡан ҡатҡыл таҡырмы, әллә ҡобайырҙарҙа данланған, халыҡ тарихының өнһөҙ шаһиты булған тау-урманлы, йәмйәшел туғай-болонло, игенсенең әсе тире менән һуғарылған иген баҫыуҙары алҡынған ер-әсәме?..

Проблемалар етерлек. Шулай ҙа Ғүмәрҙең иртәгәһе көнгә ышанысы ла, өмөтө лә бик ҙур: ныҡыныр ул ауыл! Ана, Мәләүездә генә лә, айына ете-һигеҙ меңгә ризалашып, эшләп йөрөгәндәр күпме! Ә беҙҙә уртаса 20 мең алалар. Комбайнерҙар ураҡ мәлендә 40 меңгә лә еткереп ҡуя. Килер заман: ауылға, ергә тартыласаҡтар. Ер үҙе тартасаҡ! Шуның өсөн һаҡлар кәрәк беҙгә ерҙе.

Йыш ҡына ул үҙен, плацдарм яулап, уны нисек тә булһа төп көстәр килгәнсе һаҡларға тейеш яугирҙай һиҙә Ғүмәр. Һаҡлау ғына түгел, уны киңәйтергә тырыша. Аңларға тейеш бит халыҡ: башҡорт үҙ еренең хужаһы булыуы, аҫабалығы менән генә көслө. Зиһенле, зирәк аҡыллы булған, киләсәкте уйлаған ата-бабалар. Тап шуға ла: "... Аямаған йәнен, түккән ҡанын, Һис бирмәгән башҡорт Уралын!"- тигән йыр тыуғандыр...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**
**Мәләүез районы Әбет ауылы.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Нурлы кеше үҙ артынан нур ҡалдыра. Әйтәйек, машина тәҙрәһенән юлда шешә ырғытып китмәйбеҙ; тәбиғәттә ял иткәндән һуң унда сүп-сар ҡалдырмайбыҙ; автобустан йәки трамвайҙан төшкәс, билеттарҙы аяҡ аҫтына ырғытмайбыҙ һәм башҡалар. Эйе, беҙ нәҡ шундайбыҙ, үҙебеҙҙе ныҡ ихтирам итәбеҙ һәм тәғәйенләнешебеҙгә бик етди ҡарайбыҙ.**

Был фани донъяла бирелгән ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙ эсендә бөтә кешелекте үҙгәртә алмаһаҡ та, үҙебеҙҙе үҙгәртеп, беҙ барыбер бөтә Йыһан үҫешенә ярҙам итәбеҙ. Бер юлы бөтә кешелек тураһында хәстәрләргә ынтылыуҙың кәрәге юҡ, ә бына ярҙамға мохтаж күрше әбейгә магазиндан аҙыҡ-түлек алып килеп бирергә йәки өйөбөҙ ишегенән килеп ингән кешегә бер сынаяҡ йылы һыу тәҡдим итергә һәр кемебеҙҙең дә ҡулынан килә бит. Сит ил авиакомпаниялары самолеттарында "Үҙегеҙҙән һуң бында инәсәк пассажир тураһында ҡайғыртып, зинһар, раковинаны ҡағыҙ таҫтамал менән һөртөп сығ!" тигән таҡта эленеп тора. Ысынлап та, һөртәләр! Эйе, быны башҡарыуы бер ҙә ауыр түгел.

Әгәр ҙә башҡаларҙың именлеге тураһында хәстәрләп, әҙерәк кенә көс-тырышлыҡ һалһаҡ, ул сағында үҙебеҙҙең дә тормош байыраҡ та, йәмлерәк тә буласаҡ. Әгәр беҙ кемде ниндәйҙер ғәйебен юйыр өсөн генә башҡарып ярҙам итергә тырышһа, бындай мәрхәмәттең әҙемтәһе сир булып киләсәк. Мәҫәлән, балаһы тураһында артыҡ ныҡ хәстәрләгән йәки ирен артыҡ ныҡ ҡурсалаған ҡатындарҙа түштәренә бәйле проблема килеп сыға. Әгәр ҙә инде башҡаларға ысын күңелдән, эскерһеҙ, шатланып, яратып мәрхәмәтлек күрһәтһән, ул үҙенә артығы менән кире ҡайтасаҡ! Ярҙам күрһәткәндә рәхмәте тураһында уйламағыҙ. Ҡулығыҙҙан килгән һәм унан да күберәк миһырбанлыҡты башҡарып, булған һәм буласаҡ именлеккә шөкөр ҡылығыҙ, һәм шул саҡ бөтә Йыһан менән бергә тантана итерһегеҙ. Шул саҡ һәр ҡошсоҡ уның тураһында хәбәр килтереүсегә әйләнәсәк, һәр күбәләк фәрештә йылмайыуы бүләк итәсәк, ә япраҡ ҡыштырҙауы һәм иҫкән ел күҙгә күренмәгән, әммә ҡөҙрәтле донъяның ауазын ишеттерер. Уның исеме - Тормош.

● Иң ябай һәм һәр кемгә аңлашылған тел - рәхмәт доғаһы.

● Тормоштоң бөләкәй генә шатлыҡтары өсөн дә рәхмәтеңде белдер, һәм ул рәхмәттәр гөрләп сәскә атыр.

● Өҫтәл артына ултырғас, көндәлек ризығың өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм ризыҡ һиңә файҙа бирер.

● Сәләмәтлегең өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм сәләмәтлегең артыр.

● Сир-сырхауҙарың өсөн рәхмәтеңде белдер, сөнки улар организмың тураһында ниҙер белгертә.

● Ямғыр һәм йәйғор мөғжизәһе өсөн рәхмәтле бул, һәм матурлыҡ һине һәр ерҙә оҙатып йөрөр.

● Мөхәббәт өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм мөхәббәт һәр ваҡыт һинең менән булыр.

● Муллыҡ-байлыҡ өсөн рәхмәтеңде белдер, һәм Йыһан мөмкинлектәренең һәм байлыҡтарының һинең алда асыла барыуына таң ҡалырһың.

Күргән-ишеткәндәребеҙҙе рәхмәт менән ҡабул итә башлайбыҙ икән, ул сағында күҙебеҙ алдынан ниндәйҙер пәрҙә төшкән кеүек булыр, һәм донъялағы нурҙар тағы ла сағыураҡ күренер. Сөнки бөтә нәмә рәхмәтле була белеүгә бәйле! Ҡулығыҙҙағы барлыҡ зиннәт-киммәттәр өсөн Юғары Көскә рәхмәт белдереү мөмкинлеген ҡулланығыҙ һәм тормошоғоҙҙо ысын әкиәткә әйләндерегеҙ. Үҙегеҙҙекен генә түгел, ә башҡаларҙыҡын да.

***✓ Шул саҡ араларынан береһе, үҙҙәрен күҙәткәнде тойғандай, артына боролоп, был яҡҡа күҙ һирпте. Ҡараштан бигерәк, егетте таныуҙан салҡан ҡолап китә яҙҙы Көнбикә. Хатта ҡапыл тайшанып, ҡулындағы сабыйҙы ҡурҡытты.***



-Килә-ә! Киләлә-әр!

Урман һуҡмағынан осоп килеп сыҡҡан һыбайлының балаларса сәрелдәк тауышын ҡырмыҫҡа иләүендәй гөжләгәндәрҙең береһе лә ишетмәҫ һымаҡ ине. Тик кемдеңдер ҡолағына салындымы, әллә үҙ мәшәҡәте менән булып йөрөгән булһа ла, һәр береһе шул һөрәнде генә көткәнме, барыһы ла башын күтәрҙе.

- Киләлә-әр!

Сауҡалыҡ аръяғындағы убаға ҡуйылған ҡарауыл ине был. Көтөүсе малайы. Ул, усаҡ ялҡынында битен бешергән ҡатын-ҡыҙ тәңгәленә етә яҙып, атының башын шаҡарҙы. Тегеһе ҡарышып айҡашты ла, һырт буйын ҡамсы осо яндырғас, хужаһының еңел булһа ла ярайһы уҡ ҡаты ҡуллылығын самалап, ҡайырылды.

Баштан-аяҡ сынъяһауланған Хафиза, тыныс ҡына көтөп ултыра торғаны бармы, таңдан усаҡ тирәһендәгеләр араһында ҡайнаша ине. Әлеге хәбәрҙән ул бар мәшәҡәтен ташлап, тирмәгә йүгереү урынына тағы ла йылдамлана төштө. Әйтерһең, байбисә түгел, ә ҡәйнәһенә ярай алмай йөрөгән килен. Уны был сарбаулауынан, сығып баҫып та, һаман иғтибар алалмай торған иренең еңелсә екереүе туҡтатты:

- Йә! Нимәһен һаман бызмырлайһың шунда! Былай ҙа бер өйөрһөгөҙ!

Ҡатын, шуны ғына көткәндәй, әле һаман һомғоллоғон юғалтмаған кәүҙәһенә йоҡа камзул өҫтөнән уратып бәйләгән иҫке шәлъяулыҡты сисеп, ағас туҫтаҡтағы йылы һыуҙа ҡулын сайҡап һөрттө лә, йәнәшәһенә килә һалып баҫты. Унда ла тик тора алмай, әле иренең билбауын тартҡылап рәтләне, әле яғаһына үрелгәйне, тегеһе асыуһыҙ ғына ҡулын һелтәне:

- Ҡуйсәле, тартҡылама.

Абдрахмандың ике күҙе сауҡа аръяғынан килеп сыға торған юлда. Ҡоҙалар көтөп торғандары. Хәҙер-хәҙер ҡаршылаусыларҙың... Ана! Күренде лә...

Килеүселәр аҡлан юлына боролоп төшкәнсе, ҡунаҡтарҙы ун алты һыбай һәм ике арба итеп һананы. Хужаларҙың самалауы ла шул тирә ине.

Төркөм, баш осонда еңелсә саң уйнатып, ярайһы уҡ яҡынлашҡансы ла сырайы яҙылманы Абдрахмандың, танау бөгәрендә ҡушылып, былай ҙа уҫал төҫ биргән ялбыр ҡаштарын йыйырып, уйсан ҡарашын юлдан алманы. Унын был торошо ҡатынын борсоуға һала. Иҫкәртеү яһарға ҡыймай, һаҡ ҡына ҡулына ҡағылып ала. Тегенеһе аңлай. Шулай ҙа һөҙә ҡарап тора бирә. Ҡатынға буйһоноп өйрәнгәнме ни ул? Ҡатынға түгел, унан былайыраҡтарына баш бирмәгән бей әле ул. Бары ҡунаҡтар күҙ күреме яҡынлашҡас ҡына, эйәге күтәрелеп, елямғыр ҡарайтҡан ҡарағусҡыл йөҙө яҙыла төшә. Унан, кисерештәрен эскә йомоп, ҡоластарын йәйеп алға атлай:

-Эһе-һе-ей! Ат уйнатып килеүселәр беҙҙең табынға микән!

* * *

Бөтөн был ҡайнашты икенсе тирмәнән дә күҙәтәләр. Ҡыҙҙар тирмәһенән. Алдан әҙерләнгән ектәргә, тишектәргә ҡыҙыһыныусан күҙҙәр ҡапланған. Әлбиттә, был ҡараштарҙың барыһын да кейәү егете ҡыҙыҡһындыра. Кем икән? Кем икәнен беләләр инде: ҡыпсаҡтарҙың был яҡтарға йәйләүгә килеп ята торған Аҡбарыҫ атлы бейҙарының кинйә улы Айыухан. Тик уны әлегә бындағы ҡатын-ҡыҙҙың береһе лә күрмәгән. Абдрахман бейҙең өлкән улы Саптар йәйләүенә килеп йөрөй тиҙәр, ундағы еңгәләрҙең хәбәренсә, бик тә күркәм ир-егет.

Көнбикә, итәгендә кәләште әҙерләүсе бер еңгәһенең имсәк балаһын тотоп, был ғауғаға артыҡ ҡатнашмай ғына ултыра. Әлбиттә, кейәү уға ла ҡыҙыҡ, әммә апаһынан айырылыу хәсрәте ауырыраҡ. Ҡапылдан апайһыҙ тороп ҙа ҡалыр микән? Апай, тип, Баҙыяндың апайлығы ла инде. Улай тип өндәшеп тә тормай былай ҙа Көнбикә. Шулай ҙа сама менән апаһы унан ике-өс йәшкә өлкәндер. Аныҡ ҡынаһын бер кем дә белмәй. Баҙыянды Абдрахман бей ике туған ҡустыһының йәйләүенән барып алды. Мәрхүм ағаһының берҙән-бер улы яҙғы төндә йылҡы ҡыуған ҡаҙаҡтар менән бәрелешкәндә башына һуғылған ине. Шул һыҙланыуҙан миктәй алмай, аңҡы-тиңке йөрөй торғас, төнгө йоҡоһонда йән биреп ҡуйғайны. Бәләкәс ҡыҙы менән йөклө ҡатыны ҡала ла, ҡатын да балаһынан бушана алмай, фани донъяға күсеп ҡуя. Килен тейешле кешеләрен тәрбиәләп ҡуйғас, Хафиза, әсәһен юғалтыуын әле яҡшылап аңлап та етә алмаған, әммә ниндәйҙер шомло хәл булыуын тойоуҙан ҡурҡып, тирмә төбөнә һырынған кескәй Баҙыянды көсләп тигәндәй һөйрәп алып күтәрҙе лә, арбаға менеп ултырып, баланы бот араһына ҡуйҙы. Һыбай атланған иренә бер генә ҡараш һирпте ул. Тегенеһе керпек елпеп кенә хуплауын белдерҙе. Ҡайтҡас, үҙҙәренең бәләкәстәре Көнбикәгә ҡушып ҡарағайнылар ҙа, ҡайҙа инде, сыбыҡ менеп сабаулап йөрөгән малай холҡло ҡыҙҙарына был наҙлы ғына тыныс бала эйәрә алманы. Күберәген тирмәлә, аш-һыу, усаҡ тирәһендәге ҡатын-ҡыҙ янында булды. Хатта әсәй булараҡ һөйләр хәбәрен, әйтер һүҙҙәрен дә Хафизаға, күберәк Баҙыяндың бер үҙенә ишеттерергә тура килде. Сөнки Көнбикә үҫмер ҡоронда ла, инде еткәс тә, тау-урман буйында ла ат араһында булды. Ағалары менән ҡылыс алышыу, уҡ атыу, тай өйрәтеү, һунар итеү унын өсөн энә тотоп сепрәк киҫәгенә теккәп ултырыуҙан күпкә ҡыҙыҡлыраҡ ине. Яратҡан урыны - урман. Урмандан ҡурҡманы, ҡапыл инеп китеп юғалыр ҙа ҡапыл килеп сығыр булды. "Бисура" ҡушаматы ла ағайҙары тарафынан ана шуға бирелгән уға. Бер үҙе ҡыр-тау гиҙер, һунарға сығыр, төнләп юғалып йөрөр булғанға.

Был яҡта һөйләнелгәнсә, бисура - урман ҡатыны. Ул һыуһылыуҙай сибәр, ғифриттай көслө, йыландай хәйләкәр һәм үсле була. Бисураларҙың ир енесләре юҡ. Ирҙәрҙе улар кешеләрҙән ала. Яңғыҙ йәшәгән йәки аҙашҡан, юлдан яҙған, ҡатынһыҙ ҡалғандарға һунар итәләр. Күҙ ҡамаштырырырлыҡ төҫтә пәйҙә булалар ҙа, ирҙең һушын алып, арбайҙар. Башын юғалтҡан ир үҙ исемен дә иҫләмәҫ хәлгә төшә икән. Ул төн һайын шул бисураны көтә, зарыға, һарғая башлай. Кәрәген алған бисура юҡ була ла ҡуя, ә бахыр ир кибеп-ҡата. Ҡайһылары шул ауырыуҙан мандый алмай, ә ҡайһыларын, аңлап ҡалып, өшкөртөп йәки башҡа әмәлдәр менән алып ҡалалар. Ир-егет артыҡ бошонһа йәки оҙайлы ауырыһа, "бисура эйәләмәнеме икән", тип фаразлайҙар.




Бисуралар тағы ла аттарҙы ярата. Улар атты менеп йөрөп, арманһыҙ итә, яндыра ала. Ҡайһылар уларҙы ат һәм ирҙең көсөн алып туҡланған йәндәр ҙә, тиҙәр.

Көнбикәнең бисуралығы урманға ғашиҡ булыуына бәйләнгән. Тағы ла ат өҫтөнән төшмәүенә. Еткән ҡыҙ булыуына ҡарамаҫтан, унын теләһә ниндәй ваҡытта ат өҫтөндә ҡырға сығып китеүе - ғәҙәти күренеш. Шул киткәндән тәүлектәр буйы юғалып тороуы ла артыҡ ғауға ҡуптармай ине... Быйылғы йәй атаһы сикләп аптырата. Бығаса малай булып йөрөгән балаһының ҡапыл ҡыҙ булып үҫеп етеүен аңғарғандан шулай итә ул. Быны ҡыҙ үҙе лә аңлай, әммә танырға теләмәй.

... Апаһын яратты Көнбикә. Тыныс, сабыр Баҙыяндың, үҙен көсләп ултыртып, сәсен тарап үргәндә йәки ятҡас, әллә ниндәй ғифриттәр, алпамышалар, мәскәйҙәр тураһында тарихтар һөйләүен, нәҙек кенә тауыш менән бәйеттәр көйләүен яратты. Ул-был эштәре өсөн әсәһенән сыбыҡ эләгеп, тышҡа сығыу тыйылған көндәрендә лә, йыуатыусыһы шул апаһы булды. Йәки Көнбикәнең үтенестәрен ата-әсәһенә еткереп, рөхсәт алышыуға булышлыҡ иткән дә ул ине. Алабарман бәләкәстәрен аҡыллы, йомшаҡ һүҙле оло ҡыҙҙары ҡурсалағанға бик ҡәнәғәт ине улары.

- Эһ! - тип тауышланып уҡ көрһөндө ҡыҙ, тик унын ҡайғыһы юҡ берәүҙә лә, барыһы ла тишек-тошоҡтан тышҡа төбәлгән.

- Ҡана! Мин дә ҡарайым әле шул кейәүегеҙгә! - тип, баланы ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып алып, бер еңгәһен этәреп, унын урынына баҫты шаталаҡ.

Үҙәк тирмә янында ике яҡ күрешеп, хәл-әүәл алышып, бер аҙ ҡайнашты ла, ололата дәрәжәгә ҡарап бүленеп-бүленеп, эскә үттеләр. Улары ҡыҙыҡ түгел Көнбикәгә, ул, муйыл күҙен йүгертеп, йәшерәктәрҙе эҙләй. Әһә, анау ситтәрәк торған ике-өс егет араһындалыр, моғайын. Тик кемеһе? Ситтән ҡарағанда, өсәүҙең ҡайһыһы булһа ла яраған кеүек. Һәр береһе аяҡ-ҡуллы, һау-сәләмәт, көс-ғәйрәте ташып торғандай. Шул саҡ араларынан, бығаса арты менән торғаны, үҙҙәрен күҙәткәнде тойғандай, артына боролоп, был яҡҡа күҙ һирпте. Ҡараштан бигерәк, егетте таныуҙан салҡан ҡолап китә яҙҙы Көнбикә. Хатта ҡапыл тайшанып, ҡулындағы сабыйҙы ҡурҡытты. Әйтерһең, ярыҡтан ҡараған күҙенә бармаҡ менән төрттөләр. Ҡыҙ усы менән ауыҙын ҡапланы: нишләй ул бында? Ниңә килгән?

- Нимә? Кейәү атынан ҡолап төштөмө әллә? - унын ауыҙын ҡаплауын пырхылдауға алған еңгәһе үҙе тишеккә ҡапланды.

- Кем ҡоланы? Кейәүме? Ҡайҙа? Кем? - ҡыҙ-ҡырҡын, бер-берен этә-төртә, тышты күҙләне.

Бөтөн сетерекле хәлдә лә урманға һыпыртыуҙы ҡулай күргән Көнбикә, баланы аллы-гөллө баластар өҫтөнә терәгәс, урҙалағы һырлы кәзәкейен тартып алды ла, сатанлап һикерә-һикерә, ситектәрен һала башланы.

- Ҡайҙа бараһың? - Баҙыян унын кейергә иткән итегенә йәбеште.

- Хә-хәҙер киләм...

- Ҡайҙа бараһың тағы? Ҡоҙалар килгән, хәҙер бата башлана!

Көнбикәне был ғына хәбәр тота алмай ине. Уға тап ана шул ҡоҙаларға күренмәҫкә кәрәк тә инде! Шуға ул апаһының күҙенә тура ҡарап йылмайҙы, әммә шул уҡ ваҡытта итеген тартып та алды. Баҙыяндың нәҙек нәфис beләктәре унын аҫау айғырҙарҙың башын ҡайырған таҫыллы ҡулдары менән көс һынаша аламы?

- Ошондай көндә лә ташлап ҡасаһыңмы? - тине апаһы иламһырап, итек ҡуңысын ысҡындырғанда.

Тирмә ишегенәсә эйәреп килеп, инәлеп ҡалды, тик һеңлеһе тыңламаны. Башта усаҡ тирәһендәге ҡатындар янына барҙы, унда бер аҙ күҙ буяғас, ҡунаҡ аттарын тәрбиәләгән малайҙар тирәһендә торғандай булды ла, тирмәләрҙән күҙ күреме алыҫлашҡас, мал-тыуар тотолған кәртәләр яғына йән-фарман йүгерҙе. Бей ҡыҙының былай йөрөүе лә, хатта тағы ла артығыраҡ булған баш-баштаҡлығы ла яңылыҡ түгел бындағы көтөүселәргә. Тик бөгөнгө байрам мәлендә һәм аллы-гөллө күлдәк-ҡашмауҙарҙа итәк туҙҙырып сабып килеүе һағайтты шулай ҙа. Төшкө ашҡа туҡтап торған ялсылар араһынан олораҡ булған Боҫҡон ҡаршы атланы:

- Нимә булып китте, Көнөкәй?

Тегеһенең үҙенән алда фарманы етә:

- Эйәрлә минекен!

Боҫҡон уға һорауҙар биреп, төпсөшөп өйрәнмәгән. Әйтер булһа, үҙе лә әйтә ул. Әле лә, етеҙ йөрөп, йылҡы араһынан ерән айғырҙы тотоп йүгәнләне лә, еңел күн эйәрен һыҡтырып ҡуйғас, боролоп, эйелә биреп, ике усын ҡушарлап тотоп, алға һуҙҙы. Шуны ғына көткән ҡыҙ һеләүһен тиҙлегендә бер аяғы менән шул усҡа баҫып этәрелде лә, эйәр өҫтөнә һикереп тә менде. Менгән ыңғайы итек үксәләре менән айғырҙың бөйөрҙәрен ҡыҫты. Уныһы үрәпсей биреп бер әйләнде лә алға йомолдо. Һыбайлынан: "Һин мине күрмәнең!" - тигән ауаз ғына һирпелеп ҡалды. Шул ҡыҙыулыҡ менән сабып барып, урман ауыҙына инеп тә юғалды.

- Был бисура мине бер ярҙырыр инде, - тип һөйләнә-һөйләнә кире аш тирмәһенә китте көтөүсе.

Оло тирмәлә эштәр көйлө барҙы. Ирҙәр араһында һүҙ беректе. Ҡалым, бирнә самалары һөйләшелде. Унан кейәү була торған егет саҡырып индерелеп, мулла менән атаһы араһына ултыртылды. Унан ҡыҙҙы, янындағы әхирәт-еңгәләре менән бергә алып килеп, шаршау артына урынлашҡанын сабыр ғына көттөләр. Унан бата уҡылды. Никах йолалары башҡарылғас, ирҙәр яғында ла, шыбырлашып ҡына ҡатын-ҡыҙҙар яғында ла, бер-береһен ҡуш ҡуллап, яурын ҡағып тәбрикләнеләр, туғанлашыуҙарын хуплап, һүҙ-хәбәр әйттеләр. Ул арала Хафизанан ым көтөп кенә торған ашнаҡсылар аш-һыу ташый, берәүҙәр ҡул сайҙыра башланы. Ҡатындар үҙ тирмәләрендә, ир-ат оло тирмәлә никах мәжлесен асып ебәрҙе. Унан, төн уртаһы ауышҡас тигәндәй, йәш-елкенсәк сар-сыу килеп йәйләүҙән күпкә ситкә илтеп ҡуйылған кәләш тирмәһе янында тартҡылашты. Еңгәләр алаһын алып, эстән әхирәт ҡыҙҙар пырылдатып ҡыуып сығарылғас, кейәү, йыртыш баҫып эскә үтте. Еңгәләр, ишекте нығытып бикләгәс, ҡыҙҙар өйөрөн усаҡтар баҙлашҡан яҡҡа эйәртеп алып китте. Ә унда әле мәжлестең ҡыҙған ғына сағы ине.

**(Дауамы бар).**

✓ *Икенсе сәпкә арба аҫтынан атыуҙы һынландырып, һуҙылған бау аҫтынан атырға кәрәк булды. Ә бына өсөнсө сәпкә тубыҡланып, дүртенсеһенә - артҡа әйләнеп атырға, бишенсеһенә 30 метр алыҫлыҡҡа атыу талап ителде.*



АФАРИН!

# ҠАНДА БУЛҒАН ҠОМАР...

## аңыбыҙ уяныуын көткән икән дә

**(Башы 1-се биттә).**

Районның һабантуй байрамын Иглин районы хакимиәте башлығы Ғафуан Шәйхетдинов һәм саҡырылған ҡунаҡтар - РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина, БР Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Азамат Хәсәнов, Башҡортостандың "Ерҙәрҙе мелиорациялау идаралығы" директоры Артур Заманов асып ебәрҙе.

- Һабантуй - борон-борондан дуҫлыҡ, тыныслыҡ, икмәк үҫтереүсе, ерҙе яратыусы һәм ҡурсалаусы әҙәмдең Ер, Һауа менән бәйләнеше символы һаналған. Бөгөн дә байрам заман кешеһенә үҙ асылын юғалтмай, ошо ҡимммәттәрҙе тапшырып килә. Иглин районында эшсән, тырыш, берҙәм кешеләр йәшәй, улар иген, данлыҡлы Иглин һуғанын үҫтерә, умарта тота, балалар тәрбиәләй. Ғөмүмән, төрлө милләт кешеләре бында уртаҡ тел табып, торған ерен йәмләп, донъя көтә. Ошондай күркәм сараның "Мәргән уҡсы" халыҡ-ара фестивале менән бергә үткәрелеүе бигерәк тә әһәмиәтле, сөнки бергә аралашып йәшәгән төрлө милләт кешеләренә үҙебеҙҙең мәҙәниәтте, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йәшәү рәүешебеҙҙе сағылдырырға, илде һаҡларлыҡ батыр ир-егеттәребеҙ барлығын күрһәтергә форсат бирә, - тине Зөһрә Йыһанур ҡыҙы үҙенең сығышында. Ауыл хужалығының хеҙмәт алдынғыларын тәбрикләгәндән һуң, һабантуйҙың иң сағыу бәйгеһе - ат сабышы башланды. Елдәй елгән арғымаҡтар күнелдәрҙе елкендереп, бер-бер артлы киң майҙанды урап ярыша торғансы, һабантуйҙағы башҡа күрәштәргә күҙ һалырға сират етте. Иглин районында төрлө милләт кешеләре йәшәй, шуға ауыл биләмәләренән килгән күргәҙмәләрҙә лә уларҙың ошо үҙенсәлеге сағылыш тапҡайны. Милли аш-һыуҙар менән тулы ашъяулыҡлы тирмәләргә теҙәлешеп, ут күрше булып урыҫ "изба"лары, таш мейестәр ултыра. Тамаша ҡылырға килеүселәр ҡунаҡсыл хужаларҙың һәр "ихатаһына" инеп сыҡҡандан һуң, Иглин районының ғына түгел, дөйөм Башҡортостан халҡының көнкүреш үҙенсәлектәренә, ғөрөфтәренә байҡау яһай алыуы тураһында һөйләнә. Артабан күптәр ауыл халҡының күргәҙмәһенә ҡапма-ҡаршы яҡта урынлашҡан төрлө биҙәүестәр, көндән эшләнгән әйберҙәр һатылған рәткә йүнәлде. Бында ысын таштарҙан, ҡиммәтле металдарҙан, финифть эрҙамында яһалған алҡа-беләҙектәрҙән тыш, боронғо өлгөләргә ҡарап та, заманлаштырып та эшләнгән сәтрәҙәр, күн янсыҡтар, боронғоларына оҡшатып пластиктан яһалған сулпылар, башҡорт халҡының музыка уйын ҡоралдары һәм башҡа бихисап ҡыҙыҡлы әйберҙәр теҙелгәйне.

Ана, күҙҙе ҡамаштырған ошо күргәҙмәләр киҫешкән ерҙә... традицион яндан уҡ атыу буйынса III халыҡ-ара









"Мәргән уҡсы" фестивале үткәрелгән майҙан янында тимер Аҡбуҙат баҫып тора. Батырҙарҙы бер майҙанға йыйырға, рухландырырға йыйынғандай, ҡанаттарын йәйеп, әле генә Күктән килеп төшкәндәй кеүек тойолдо ул. Уның эргәһенә йыйылған халыҡ төркөмөн үтеп, бәйге майҙанына аяҡ баҫтыҡ һәм... бер кемгә иғтибар итмәй, бары тик уҡ атыу күнекмәләре менән мәшғүл уҡсылар араһына килеп индек.

Мәргән уҡсылар фестивален ойоштороусыларҙың береһе Юлай Ғәлиуллин әйтеүенсә, быйыл өс турнирҙан торған бәйгелә 82 уҡсы ҡатнашҡан. Беренсе көндә үткәрелгән республика турнирында Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған уҡсылар көс һынашҡан. Улар араһынан ни бары ун ике иң мәргән, етеҙ уҡсы "Евразия кубогы" турнирында республика намыҫын яҡлау хоҡуғын алған. Уғатарҙар был этапта "Бүрәнә", "Шыршы", "Ҡабан", "Шүлгән", "Яу", "Тәҙрә" тигән алты төр һынау үткән. Атамаларына ҡарап та һынауҙарҙың ҡатмарлығын, сәмле кешенең көс-ғәйрәтен тоҡандырып ебәрерлек булыуын күҙалларға мөмкин. Республика турнирында беренселекте яулаусы Сибай ҡалаһы уғатары Хөрмәт Таһиров әйтеүенсә, сослок та, таҫыллыҡ та, мәргәнлек тә талап ителгән был ярышта. "Мин йәш саҡтан ҡулыма уҡ-һаҙаҡ тотоп, мәле тура килгәндә атып ҡарарға әүәҫ кешемен. Ошо ярыштар үткәрелә башлағас та үҙем эшләгән ян менән килеп, икенсе урын алып ҡайтҡайным. Быйыл республика уғатарҙары араһында беренселекте яуланым, кеше йөрәгенең ныҡлығынан тора бит ул мәргәнлек", - ти ул. Был турнирҙа ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ярышты. Улар араһында Учалы ҡалаһынан Лиана Ихсанова иң мәргәне тип табылды, икенсе урынды Ғафури районынан Гүзәл Ибәтуллина, өсөнсө урынды Учалы ҡалаһынан Лилиә Низаметдинова яуланы.

Ә бына фестивалдең икенсе көнөндә үткәрелгән ярышта иртәнән кискә тиклем башҡорт уғатарҙары Мәскәү өлкәһе, Омск һәм Силәбе ҡалалары, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Беларусь, Словакия, Германия илдәренән килгән бәйгеселәр менән бергә II халыҡ-ара "Евразия кубогы" турнирында урындан тороп сәпкә тейҙереү һәм һыбай уҡ атыу буйынса оҫталыҡтарын һынаны. Мәргәндәрҙе сәмләндереү ниәтендә ойоштороусылар был турнирҙы ла үҙҙәренсә төрләндереп ебәргән: "Дағa", "Ҡотҡарыу", "Баҫҡыс", "Ҡараултау" тигән һынауҙар аша үтте уҡсылар. "Дағa" тип аталған һынауҙа уғатарҙар 20 метр алыҫлыҡта ҡуйылған сәптәге дағa һүрәттәренә икешәр уҡ эләктерҙе. "Ҡотҡарыу" һынауы ла ситтән ҡарап тороусыларға бик ҡыҙыҡлы тойолдо: аманатҡа алынған һылыу ҡыҙҙы ҡотҡарыу өсөн яуыз урлаусыны "уҡтан атып йығырға" кәрәк ине. "Баҫҡыс" тигән һынауҙа төрлө алыҫлыҡта биш сәп ҡуйылған, беренсеһенә уғың теймәйенсә, икенсеһенә күсергә ярамай ине. Үҙ сиратында, 15 метр алыҫта ҡуйылған икенсе сәпкә арба аҫтынан атыуҙы һынландырып, һуҙылған бау аҫтынан атырға кәрәк булды. Ә бына өсөнсө сәпкә тубыҡланып, дүртенсеһенә - ҡапыл артҡа әйләнеп ебәреп атырға, бишенсеһенә 30 метр алыҫлыҡҡа атыу талап ителде. Был һынауҙарҙы үтеп сыға алған уғатарҙар "Ҡарауылтау" тигән һынауға барып етте. Уның айышы шунда ине: 110 метр алыҫлыҡта өскә өс метр булған дүрткел сәпте дошман ғәскәре тип һанлап, күктән уҡтар яуҙырырға. "Евразия кубогы" турнирында енеүсе исемен алыу өсөн бына ниндәй ҡатмарлы һынауҙарҙы үтеп сығыу талап ителде.

Ярыш барған арала сит илдәрҙән үҙ иҫәбенә килергә мөмкинлек тапҡан уғатарҙар менән аралашырға тура килгәйне. Минск ҡалаһынан Егор Яцук Башҡортостанға икенсе тапҡыр килгән, ул былтырғы "Мәргән уҡсы" турнирҙарында ла ҡатнашҡан. "Был шөғөл менән биш йыл тирәһе мауығам, бала саҡ хыялымды тормошҡа ашыра алыуыма шатмын, - ти Егор. - Башҡорт мәҙәниәте менән яҡындан таныша алдым, ойоштороусылар бәйгене юғары кимәлдә үткәреүҙән тыш, башҡорттарҙың мәҙәниәте, тарихы тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ҙә һөйләне. Һыбай йөрөп уҡтан атырға өйрәнергә генә ҡалды хәҙер, күптән был эшкә тотонорға итәм дә, бер сәбәбе сығып тик тора. Бөгөн башҡаларға ҡарап, бик ҡыҙығып торҙом әле, таҫыллыҡ талап иткән был эштә лә егетлегемде һынап ҡарарға ниәт бар".

Һәр халыҡтың йолаһы, ғөрөф-ғәҙәте, йәшәү рәүеше, кейем-һалымы үҙенә күрә айырым бер ҡабатланмаҫ үҙенсәлектәргә эйә булған кеүек, яу сабыу, һунар итеү эшендә лә айырмалыҡтар булған. Уғатарҙарҙың яндары, ҡалъяндары, кейемдәре лә әллә күпме тарих һөйләй. Сөнки уларҙың күбеһе уҡ-һаҙаҡты ҡулына алырҙан алда үҙ халҡының тарихын өйрәнеүҙән башлаған. Мәҫәлән, Словакияның Глоговец ҡалаһынан килгән Давид Филип атлы ир-уҙаман тарихи китаптар уҡырға яратыуы арҡаһында бынан алты йыл элек үҙенә яңы шөғөл тапҡан. "Мин тарих менән электән ҡыҙыҡһынам һәм Генрих Шлимандың "Троя" тигән китабын уҡығас, шул осорҙоң рухын тойоп ҡарау өсөн уҡ-һаҙаҡ алып, кейемдәрен кейеп ҡарағым килде. Шунда уҡ бер ян һатып алдым да, өйрәнә лә башланым. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, бөгөн бында минең генә яным башҡаларҙыҡынан оҙонлоғо менән айырылып тора, был инглиздарҙың оҙон яны. Словакия, Европа территорияһында йәшәгән халыҡтар күсмән булмаған, бер ваҡытта ла һыбай атмаған, шуға күрә яндары ошо рәүешле оҙон итеп эшләнгән. Ҡайһы бер тарихи сығанаҡтарҙа күрһәтелеүенсә, ян ике метрҙан да ашыу булған хатта. Башҡорттар атҡан яндар ҡыҫҡа һәм һыбай атырға уңайлы булһа, беҙҙең яндар оҙон, уғатарҙың көсөнә ҡарап йыуанырaҡ итеп тә эшләнер булған", - ти алыҫтан килгән бәйгесе. Әйткәндәй, үҙе аэропортта диспетчер булып эшләгән Давид Филип йәй айҙарында аҙна һайын тиерлек яңы фестивалдәргә йөрөй. Яҡын киләсәктә ул Мәскәүҙә, Калининградта, Польшала, Ҡырғыҙстанда үткәрелгән уғатарҙар ярышында ҡатнашасаҡ.

Ә бына Омск ҡалаһының "Служилые люди Сибири" хәрби-тарихи реконструкция үҙәге уҡытыусыһы Даниил Вяткин эшен һәм яратҡан шөғөлөн бер үк ваҡытта алып бара. Ул традицион уҡтан атырға өйрәнергә теләгән 14-17 йәшлек үҫмерҙәргә өҫтәлмә дәрестәр үткәрә, үҙе яндар эшләй. "Уҡ атып ҡарарға теләп, интернет селтәрендә тәүге мәғлүмәттәр эҙләй башлаған саҡта Төмән өлкәһенән Иван Агапов исемле яндар эшләүсе оҫта менән таныштым. Тәүге яндарҙы унан өйрәнеп эшләнем, шунан Азия халыҡтарының яндары менән ҡыҙыҡһынып киттем, сөнки улар күпкә яҡшыраҡ. Был яндарҙы эшләүе ҡатмарлы, улар ҙур ауырлыҡты күтәрә, ҡыҫҡараҡ булғас, һыбай атҡанда ла уңайлы. Керешен ысҡындырһаң, ян киреһенә бөгөлөп тора, шуға һәр халыҡтың яңы үҙенә генә хас геометрик параметрҙарға эйә булған, төрлө материалдарҙан яһалған. Мин боронғоға оҡшатырға тырышһам да, әлегә стилләштерелгән яндар эшләйем, сөнки ата-бабалар кеүек тәбиғи материалдар - тарамыш, мөгөҙ, һөйәк ҡушмайым. Бындай биокомпозит янды киләсәктә эшләп ҡарарға хыялланам..." - тине Даниил әңгәмәләшкәндә.


**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓ *Кем көнө буйы 8 сәғәт тирәһе ултыра, уларҙың диабет, һимереү, яман шеш, йөрәк ауырыуҙарына дусар булыу ихтималлығы арта. Тикшеренеү авторҙары көнөнә 4-5 сәғәттән артыҡ ултырып эшләргә кәңәш итмәй.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТИК УЛТЫРМА...

## хәрәкәтлән

■ Ньюкасл университеты табиптары бер тәүлек эсендә кеше күпме шәкәр ашарға тейешлеген асыҡлаған. 1990 йылда Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы шәкәрҙең нормаһын түбәндәгесә билдәләгәйне: ир-егеттәр өсөн - 70, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 50 грамм. Белгестәр иҫәпләүенсә, был күләм бик ҙур. Көнөнә 5 балғалаҡ, йәғни 30 грамм шәкәр етә, ти улар. Шәкәр ҡулланыуҙы кәметеү йөрәк сәләмәтлеген яҡшыртып ҡына ҡалмай, диабеттан, теш ауырыуҙарынан һаҡлай. Норманы иҫәпләгәндә уның төрлө ризыҡтар составында булған күләмен дә иҫәпкә алырға кәрәк.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, муйын ауыртыуы - психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Бөтөн донъя сәләмәтлекте һаҡлау ойошмаһы иң зарарлы медицина ҡорамалдары исемлеген төҙөгән. Унда терегөмөшлө ябай градусниктар ҙа ингән. Табиптар фекеренсә, уларҙы күптән хәүефһеҙерәк ысул менән алыштырырға кәрәк. Быйылдан медицина ҡоролмаларында терегөмөш ҡулланыу тыйыла, 2030 йылға тиклем уны бөтөн донъяла тыйыу планлаштырыла.

■ Кембридж университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡояш нуры етешмәгән кешелә йөрәк һәм яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеү хәүефе арта. D витамины етешмәһә, һөйәктәр муртҡа әйләнә, диабет, йөрәк сирҙәре, яман шеш аҙа. Көнө буйы ябыҡ бинала ултырып эшләүселәрҙең һәр унынсыһы хәүеф аҫтында, ти ғалимдар. D витамины күп кенә химик реакцияларҙа ҡатнаша. Был витаминдың төп сығанағы булып ҡояш нурҙары тора. Йәйен ҡояш аҫтында 20 минут йөрөү ҙә етә, әммә ҡышын организмды D витамины менән тулыландырыу өсөн туҡланыуға ла иғтибар арттырығыҙ. Балыҡтың майлы сорттарын ашау файҙалы. D витамины тулыһынса үҙләштерелһен өсөн кальций кәрәк, шуға ла һөт аҙыҡтары ла өҫтәлегеҙҙә гел булһын.

■ Япон кухняһын яратыусыларға умами тигән тәм биргес яҡшы таныш. Был тәмде натрий глутаматы бирә. Күптәр натрий глутаматына кире ҡараштa булһа ла, ысынында иһә глутамат кешенең тәнендә бар һәм ул нервы күҙәнәктәре араһында электр сигналдары ташый. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, умами тәме өлкән кешеләрҙең сәләмәтлегенә өсөн файҙалы. Япония ғалимдары билдәләүенсә, натрий глутаматы һәм башҡа тәм көсәйтеүселәрҙең тағы бер ыңғай яғы бар - улар файҙалы, ләкин тәмһеҙ ризыҡты ла тәмлегә әйләндерә.

■ Эштә көнө буйы ултырып эшләһәгеҙ, 1 сәғәт буйына физик күнекмәләр менән шөғөлләнеү ҙә һеҙгә сәләмәтлек өҫтәмәйәсәк. Торонтолағы Реабилитация институты ғалимдары 47 кешенең йәшәү рәүешен тикшереп ҡараған. Кем көнө буйы дөйөм алғанда 8 сәғәт тирәһе ултыра, башҡа факторҙарға ҡарамайынса, уларҙың диабет, һимереү, яман шеш, йөрәк ауырыуҙарына дусар булыу ихтималлығы ҙурая. Тикшеренеү авторҙары көнөнә 4-5 сәғәттән артыҡ ултырып эшләргә кәңәш итмәй, тороп бер аҙ хәрәкәтләнеп булһа ла алырға кәрәк.

ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Бер генә минутҡа бөтөн үҫемлектәрҙең дә япраҡһыҙ булыуын күҙ алдына килтерегеҙ әле. Тирә-йүнебеҙ ниндәй шыҡһыҙ булыр ине. Үҫемлектәрҙең япраҡһыҙ булыуы кешеләрҙе лә йырып сыҡҡыһыҙ проблемаларға батырыр ине. Беҙ япраҡтарҙың төҙөлөшөндә Тәңренең асылы сағылыуын да күрмәйбеҙ. Япраҡтарҙың ниҙәр һөйләүен тыңлайыҡ әле.**



# ЯПРАҠТАР ҺӨЙЛӘЙ...

Һүҙ - япраҡтарға. Беҙ, япраҡтар, бәшмәк менән мүктән башҡа бөтөн үҫемлектәрҙә лә йәшәйбеҙ. Тәңре беҙҙе ғәжәйеп биҙәктәр менән биҙәп, формабыҙ һәм ҙурлығыбыҙ буйынса төрлө итеп яралтҡан. Билдәле булыуынса, япраҡтар атмосферала кислород запасын тулыландыра. Миндәге бәләкәй генә тишектәр һауалағы фотосинтез өсөн кәрәкле углекислый газды йотоп, кислород бүлеп сығарырға һәләтле. Шул рәүешле мин икенсе тере органик матдәләр өсөн файҙалы матдәләрҙе эшкәртеп сығарып, уларҙы үҙемә кәрәкләләренә алмашам. Сөнки мин дә, башҡалар кеүек, тыуам, туҡланам, йәшәйем һәм үләм.

Япраҡтар нисек тыуа? Тыуғанға тиклемге осором үҙе бер серле донъя. Әсә ҡарынындағы яралғы кеүек, минә лә тыуғанға тиклем туҡланырға кәрәк. Бының өсөн Аллаһы Тәғәлә Ҡояш энергияһына, углекислый газға, ерҙәге туҡландырғыс матдәләргә һәм һыуға мине бөтөн кәрәкле нәмәләр менән тәьмин итергә бойорған. Тыуыр өсөн яҙғыһын минә тупраҡтың дымы һәм Ҡояштың наҙлы йылыһы кәрәк. Ғалимдар быны япраҡтарҙы формалаштырыусы факторҙар, тип атай. Шытымды минең әсәйем тип атарға мөмкин. Тупраҡтан дым һәм башҡа кәрәкле матдәләр алып еткермәгән осраҡта, тәнемдә май, гликоген һәм башҡа туҡландырғыс матдәләр туплана һәм оҙаҡ һаҡлана. Шуның өсөн яҙ һайын үҫемлектәрҙең иҫке ботаҡтарында яңы япраҡтарға йән инә. Яҙғыһын ҡырҡылған ағасты күҙ алдына килтерегеҙ әле. Күп ваҡыт та үтмәй, ул янынан йәшәрә, ҡырҡылмай ҡалған ботаҡтары япраҡ яра башлай.

Ни өсөн тигәндә, ағас үҙенең олононда һәм ботаҡтарында һаҡланған баяғы туҡландырғыс матдәләрҙе үҙенән шытып сыҡҡан йәш ботаҡҡа бүлә. Ботаҡтар минә тыуырға ярҙам итә. Ботаҡтың эсен йырғыслаған бик күп каналдар буйлап тупраҡтан минә файҙалы һут ағыла. Тышымда кеше организмындағы ҡан тамырҙарын хәтерләткән һыҙыҡтарҙа шул каналдарҙың күплеген күрерһегеҙ. Улар органик һәм органик булмаған матдәле айырым шыйыҡлыкты ташыусы ролен үтәй.

Беҙ, япраҡтар, ҙурлығыбыҙ, төҫөбөҙ, формабыҙ һәм тышыбыҙҙағы һыҙыҡтарҙың төрлө булыуы менән бер-беребеҙгә тамсы ла оҡшаш түгел. Кешеләр кеүек үк, һәр япраҡтың да үҙенә генә хас йөҙө бар. Шулай ҙа беҙҙе өс төп төргә, йәғни энәле, озонса һәм ҡыяҡлы төргә бүлергә кәрәк.

Улар төрлө-төрлө... Ысынлап та япраҡтарҙың ҡайһы берҙәре шыма һәм төҙ генә, икенселәре шундай нәфис бөгөлөшлө, йәйенке була. Тотоп ҡарауға бәрхәттәй йомшаҡтары ла күп, ә ҡайһыларының ситтәрен беленер-беленмәҫ энәләр ҙә ҡаймалай... Уларҙың төрлө булып барлыҡҡа килеүенең сере ниҙә һуң? Бәлки, ул тирә-яҡ мөхиттең айырым үҙгәрештәренә бәйлелер? Шулай ҙа үҫемлектәрҙе биҙәүсе япраҡтарҙың төрлөлөгө, Аллаһы Тәғәләнең донъяны һоҡланғыс бер тәртиптә урынлаштырыуының асыҡ сағылыушылыр, тип уйлайым. Мәҫәлән, шыршы, пихта кеүек йәшел энәле ағастарҙы үтә нығ һәм сыҙамлы итеп яралтҡас, бик ҡырыҫ шарттарҙа ла үҫәләр һәм улар янында башҡалар күпләп үрсей алмай. Энәһеҙҙәр бер ерҙәрәк тупланып үҫеп, шау япраҡлы төрлө ағастарҙан торған ҙур урмандар хасил итеүсән. Формаһы оҙонсараҡ һәм аҫҡы өлөшө сәнскеле япраҡтар шул сәнскеләре менән үҙҙәрен ағыулы үлән ашарға яратҡан кейектәрҙән һаҡлай. Шулай уҡ көн һәм төн япраҡтары ла осрай. Уларҙың икеһе лә бер ағаста йәки үҫемлектә булыуы мөмкин һәм тәүлек әйләнәһенә бер туҡтамай һауаны таҙарталар. Төн япрағы аҙ ғына яҡтылыҡта ла фотосинтез барлыҡҡа килтерергә һәләтле. Хатта үҙенә кәрәкле азотты ала алмаһа, Аллаһы Тәғәлә биргән һәләте ярҙамында бөжәктәрҙе аулаусы япраҡтар ҙа була.

Япраҡ үҙенең был донъялағы тәғәйенләнешен аңлауымды тойоуын белгертеп, аҙ ғына елферләп, ҡыштырҙап ҡуйҙы һәм ҡыуаныуынан төҫө тағы ла сағыуыраҡ балҡып, яңынан һүҙ башланы:

- Төҫөбөҙ, формабыҙ буйынса төрлөлөгөбөҙ, арымай-талмай ағыулы газдарҙы йотоп, кешеләр өсөн һулар һауаны таҙартыуыбыҙ һәм ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙ эсендә тағы ла бик күп файҙалы эштәр эшләргә өлгөрәүебеҙ - барыһы ла Аллаһының бөйөклөгөн, мөһабәтлеген һәм был донъяла бөтә нәмәне фәҡәт Уның барлыҡҡа килтереүен һөйләй...

Япраҡ арыны һәм һөйләүҙән туҡтаны. Уның үҙәгенән бүленеп сығып, ергә тамған гәлсәрҙәй саф бер тамсы һыу үҙен барлыҡҡа килтереүсе Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле күҙ йәше булып тойолдо...

ҠЫҘЫЫҠ!

# ЙЫҺАН АҢЫ...

## барыһын да күрә, ишетә



**Бөйөк рус ғалимы Владимир Иванович Вернадскийҙың фәнни тәғлимәте буйынса, Ер - ул бөтөн бер тере система. Унда кешелек тарафынан тупланған белем, рухи донъя эҙһеҙ юғалмай. Ул ноосферала туплана. Ноосфера - беҙҙең телгә тәржемә иткәндә, Йыһан аңы (космический разум).**

Йыһандың иге-сиге юҡ, ләкин унда тәртип теүәл һаҡлана. Тәртиптең нигеҙендә метематика һәм тәбиғәт законлары ята. Парапсихологтар әйтеүе буйынса, ерҙә энергетик әүҙем зоналар бар. Бындай зоналар Ерҙәге тереклекте, рухи аңды тотоп тороп өсөн Йыһан аны тарафынан булдырыла. Бындай зоналарҙың береһе беҙҙең төбәктә - ул Ташморон ҡаяһы. Ауыл халҡы был ҡаяның ябай түгеллеген электән белгән. Аңлы кешеләр был урынға килеп, күңел тыныслығы табып, көс алғандар. Алдағы цивилизация эҙҙәре бында әле лә һаҡланған. Иғтибарлап, күңел менән баҡҡандар Ташморонда таш һындар, ғәрәп графикаһын әле лә күрә ала.

Парапсихологтар таш һындарҙы "тарих ағымы" тип аңлата. Е. Блаватская таш һындарҙы "кристаллашҡан тарих" тип атай. Э. Мулдашев фаразы буйынса, элек кешеләр беҙҙең һымаҡ углеродтан һәм водородтан түгел, кремнийҙан торған. Кремний кристалы үҫеү үҙенсәлегенә эйә, шуға күрә ул кешеләр буйға оҙон булған. Был турала беҙҙең "Урал батыр" эпосында ла яҙылған.

Эйе, тереклек бик нескә. Уны һаҡлауҙа һәр кеше ҡатнаша ала. Бының өсөн рухи таҙалыҡҡа ынтылыу, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү, ғөрөф-ғәҙәттәреңде онотмау, халҡыңа, илеңә хеҙмәт итеү, телеңде һаҡлау, милләтеңде таныу фарыҙ. Былар барыһы ла "ғәләм аңы" тарафынан хуплана. Ошоларға өлгәшкәндә генә һин ысын мәғәнәһендәге шәхес була алаһың. Бынан да ҙур бәхет юҡтыр.

Физика законы буйынса, кешенең уйы ла, әйткән һүҙе лә ғәләмгә барып етә, математика закондары буйынса һынау тота. "Йыһан аңы" бөтәһен дә күрә, бөтәһен дә белә. Бер аҡыл эйәһе әйткәнсә: "Әгәр ерҙә йәшәгән халыҡтарҙың өстән бер өлөшө генә тыныслыҡ теләһә, ерҙә күптән ожмах булыр ине". Был - хәҡиҡәт. Яҡты уйҙа, изге ниәттә, ыңғай, позитив ағымда булайыҡ!

**Лариса ИШМОРАТОВА.**
**Учалы районы Сораман ауылы**

✓ *Һеҙгә оҡшаған өлкәлә һеҙҙән дә яҡшыраҡ белгән, "текәрәк" кешеләрҙе эҙләгеҙ һәм улар менән күберәк ваҡыт үткәрегеҙ. Иң мөһиме - ул төркөмдә уртаса булырға тырышмағыҙ, һәр ваҡыт алдынғылар рәтендә йөрөүҙе маҡсат итеп алығыҙ.*



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҺҮҘЕҢ - ҮҘЕҢӘ,

## үҙең һүҙеңә килешһә...



Тоғролоҡ - һүҙҙәребеҙҙә, эштәребеҙҙә һәм хәрәкәттәребеҙҙә дөрөҫ булыу, тигәнде аңлаталыр.

Тоғро кеше ялған һөйләмәҫ, бер кемде лә алдамаҫ, башҡаларға ҡарата хәйлә ҡормаҫ. Тоғролоҡто Алла мосолмандары тоғро ҡылған. Бик күп аят һәм хәҙистәрҙә тоғролоҡтоң әһәмиәте аңлатылған. Ҡөрьәндә былай тиелә: "Әй, мөьминдәр, Алланан ҡурҡығыҙ һәм тоғролар менән бергә булығыҙ".

Мосолман - һүҙе үҙенә, үҙе һүҙенә килешкән кешелер. Мосолман күренгән кеүек булыр, булғаны кеүек күренер.

Мосолман ҡулы һәм теле менән башҡаларға зарар итмәҫ. Үҙе өсөн теләгән нәмәне мосолман ҡәрҙәше өсөн дә теләр. Мосолман хәләл малына һәм аҫҡысына хәрәм ҡатыштырмаҫ. Ғаиләһенә һәм балаларына харам ризыҡ ашатмаҫ. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә былай тигән: "Мосолманға зарар иткән һәм уны алдаған кеше беҙҙеке түгел".

Ҡөрьәндә былай тиелә: "Кәметеп үлсәй торған үлсәү ҡулланғандарға ҡаты ғазап барҙыр. Улар кешеләрҙән һатып алғанда теүәл иттереп үлсәтеп алыр, ләкин һатҡанда кәм үлсәп һатыр".

Кеше белмәҫ, һиҙмәҫ, тип, бындай эштәрҙе эшләргә һис ярамай. Сөнки эшләгән эштәребеҙҙе Алла һәр ваҡыт күреп тора. Кирамән Кәтибин фәрештәләре гонаһ һәм сауаптарыбыҙҙы яҙып бара. Кешеләрҙе алдаһаҡ та, Алланы алдау мөмкин түгеллекте иҫтән сығарырға ярамай.

Ысын һәм эскерһеҙ мосолман үҙенең тоғролого һәм эскерһеҙлеге менән айырылып тора. Ул кешеләр менән аралашҡанда төрлө ауырлыҡтар һәм уңайһыҙлыҡтар менән осрашыуға ҡарамаҫтан, хәйләләмәй, аңлашылмаған һәм ялған һүҙҙәр һөйләмәй.

"Дөрөҫлөктә, иман килтергән кешеләр: "Беҙҙең тәрбиәсебеҙ - Аллаһ!" - тиерҙәр ҙә, иманда, диндә һәм тормошта тоғро, ғәҙел һәм ныҡ булырҙар. Үлгән ваҡыттарында уларға рәхмәт фәрештәләре килер һәм: "Һеҙ - хаҡ мөьминдәрһегеҙ. Үлемдән һәм Әхирәт ғазаптарынан ҡурҡмағыҙ. Бәлки, үҙегеҙгә вәғәҙә ителгән йәннәттәрҙең һеҙгә бирелеүенә шатланығыҙ," - тиерҙәр. Беҙ һеҙҙең менән донъяла һәм Әхирәттә дуҫтарбыҙ. Үҙегеҙгә әҙерләнгән йәннәттә күңелдәрегеҙ ни теләһә - шул булыр, унда һеҙгә ни һорағаһығыҙ - шул бирелер".

Тоғролоҡтан тайпылмауысы мөьминдәрҙе бына ниндәй ҙур бүләктәр көтә! Рәхмәт фәрештәләре уларға бына ниндәй ҡыуаныслы хәбәрҙәр килтерәләр. Быларҙың барыһы ла тоғролоҡтоң ни ҡәҙәр юғары һәм бөйөк дәрәжәлә булыуын күрһәтә. Быларға бары тик Алланан ҡурҡыусы, Аллаға ысын күңелдән ғибәҙәт ҡылыусы һәм был донъяла байлыҡ, юғары дәрәжә һәм башҡаларға баш эйеү бығауҙарынан азат булғандар ғына ирешә.

Йөрәгенә Ислам тәрбиәһе һеңгән ысын мосолман үҙ вазифаһына тоғролоҡло һәм биргән вәғәҙәләрен үтәүсе була. Был сифаттар уның йәмғиәттәге урынын билдәләүсе иң мөһим үҙенсәлек булып тора. Был үҙенсәлек уны тағы ла дәрәжәләрәк итә. Бындай сифатҡа эйә булыу мосолмандың хаҡ динле булыуын күрһәтә.

УЙЛЫҒА -УЙ

# БАЙҘАР ТОРМОШОНАН...

## егерме ҡағиҙә



**1.** Донъя һине ахмаҡ итеп ҡалдырырға теләй. Банкка түләгән аҡсаларҙан алып, мөгжизәле диеталарға тиклем - бөтә нәмә наҙан кешеләрҙән аҡса һығып алыуҙы һәм улар менән етәкселек итеүҙе еңеләштереүгә ҡоролған. Шуға күрә, белемегеҙҙе камиллаштырыуға бөтә көсөгөҙҙө һалығыҙ.

**2.** Белем биреү институттарына күҙ йомоп ышанмағыҙ. Унда уҡытыу пландары әҙерләнгәнсе, система иҫкерә. Лидерлыҡ итеү һәм эштәр арҡылы уҡыу, кешеләр араһында абруй ҡаҙаныу эйәреп эшләүгә ҡарағанда күпкә яҡшы.

**3.** Мөмкин тиклем күп уҡығыҙ. Шәп уҡығанда ла күп мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырып өйрәнегеҙ. Был осраҡта аҙнаһына бер китапты уҡып бөтә алаҫаҡһығыҙ.

**4.** Бөтә кешеләр менән дә аралашырға, уртаҡ тел табырға тырышығыҙ. Кешелә һеҙгә оҡшаған сифаттарҙы табырға өйрәнегеҙ һәм әңгәмәләшкәндә быны үҙ файҙағыҙҙа ҡулланығыҙ.

**5.** Оялып тороуға ваҡытығыҙҙы әрәм итмәгеҙ. Оялсанлыҡ - ул хис-тойғолар һеҙ ҡабул иткән ҡарарҙың судьяһына әйләнә, тип ышаныу, ә ваҡыт быны тап киреһе.

**6.** Әгәр ҙә берәйһе менән аралашҡан саҡта күңелгә ятмаған нимәләр булһа, мөнәсәбәттәрҙе өҙөү тап ошо оҡшамаған нәмәнән ҡотолорға ярҙам итер.

**7.** Үҙегеҙҙән оло кешеләр менән күп аралашығыҙ. Йәштәштәрегеҙҙең ҡарарҙар ҡабул итеү системаһы һеҙгә ярҙам итмәйәсәк. Ә ололар һеҙ әле белмәгән, аңламаған нәмәне лә белә, һәм уларҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалыу мөһим.

**8.** Һеҙгә оҡшаған өлкәлә һеҙҙән дә яҡшыраҡ белгән, "текәрәк" кешеләрҙе эҙләгеҙ һәм улар менән күберәк ваҡыт үткәрегеҙ. Был үҙенән-үҙе мөһим нәмә, ләкин иң мөһиме - ул төркөмдә уртаса булырға тырышмағыҙ, һәр ваҡыт алдынғылар рәтендә йөрөүҙе маҡсат итеп алығыҙ, камиллашығыҙ: ҡыҙыҡлы идеяларҙы тормошҡа ашырығыҙ, дан ҡаҙанығыҙ, ярҙамсыл һәм зирәк булығыҙ.

**9.** Ваҡыт үтеү менән кеше консерватив була бара. Был факт. Эргә-тирәләге кешеләр бығаулышлыҡ ҡына итә, ҡыуыҡ кеүек сикле киңлек барлыҡҡа киләсәк. Шуға күрә, дыуамал идеяларҙы хәҙер үк тормошҡа ашырып ҡалырға тырышығыҙ. Һуңынан ҡурҡытасаҡ.

**10.** Сығымдарҙы бөтөнләй ҡыҫҡартығыҙ. Был һеҙгә тап әле генә телгә алған дыуамал идеяғыҙҙы тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирер.

**11.** Әйберҙәр ярҙамында статусығыҙҙы күтәргәнсе (барыбер ваҡытлыса ғына), тәжрибә ярҙамында күтәрегеҙ. Икенсе төрлө әйткәндә, Парижға сәйәхәт итеп ҡайтыу яңы шкаф алыуға ҡарағанда күпкә отошло. Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, был тормоштан ҡәнәғәтләнеү тойғоһон күтәрә икән.

**12.** Мохтажлыҡ кисерһәгеҙ - аҡса мәсьәләһен хәл итегеҙ. Интернет менән ҡулланығыҙ - ул һеҙгә аукциондарҙа әйберҙе осһоҙға һатып алырға булышлыҡ итер. Әгәр ҙә әлеге мәлдә эш хаҡынан эш хаҡына тиклем йәшәһәгеҙ, ошо осорҙо ике аҙнан өс аҙнаға тиклем һуҙығыҙ. Һуңынан, эштәр яйға һалыуна биргәс, бер айға пландар ҡорорға, өс айға, ярты йылға һәм бер йылға алдан уйларға мөмкин. Быныҡ маҡсаты - биш йыллыҡ пландар ҡороп йәшәү кимәленә тиклем күтәрелеү.

**13.** Проект төҙөргә өйрәнегеҙ, был логиканы, хәтерҙе яҡшыртырға һәм фаразлай белеү ҡеүәһен үҫтерергә ярҙам итер.

**14.** Йәш саҡта артыҡ ауырлыҡ йыймағыҙ, һәр ваҡыт үҙегеҙҙе формала тотоғоҙ.

**15.** Бешерергә өйрәнегеҙ - был тормошто күпкә еңеләйтә, ҡиммәт булһа ла көн дә кәрәкле нәмә күңелгә яткан шөғөлгә әйләнә һәм аҡсаны ла бәрәкәтле итә.

**16.** Туйғансы йоҡлағыҙ, йоҡо һәм бешереп ашаған аштар һимермәҫкә ярҙам итер. Әгәр ҙә "Эшем күп ҡалды, йоҡларға ваҡыт юҡ", тип уйлайһығыҙ икән, йоҡоһо туймаған кеше файҙаһыҙ булыуы һәм йоҡо ваҡытын ҡыҫҡартыу һеҙгә ярҙам итмәүен иҫкә төшөрөгөҙ.

**17.** Элек ҡуйын дәфтәре йөрөтһәләр, хәҙер уның урынына телефонда йәки башҡа гаджеттарҙа махсус ҡушымталар бар. Иҫегеҙ яҡшы булыуға таянып, "бөгөн шуны эшләргә тейеш инем, буғай", тип эшләмәгеҙ. Барыһын да яҙып барығыҙ һәм шул яҙыуҙарға таянып, көндәлек эштәрегеҙҙе билдәләгеҙ.

